*✓ Бер аҡһаҡалдан: "Һеҙ еңел булмаған ғүмер юлы кисергәнһегеҙ, нисек итеп күңел сафлығын һаҡлап ҡала алдығыҙ?"- тип һорағандар. "Миңә изгелек ҡылһалар, уларҙы йөрәгемә, ә насарлыҡтарҙы һыуға яҙып барҙым. Әгәр ҙә бының киреһен эшләгән булһам, бөгөн йөрәгем яраларҙан ҡалған йөйҙәрҙән генә торор ине, әле ул ожмахҡа тиң. Хоҙай Тәғәлә беҙгә ике мөһим сифат биргән: кеше ҡайһылыр ваҡиғаларҙы хәтерендә торорға, ҡайһыларын оноторға тейеш. Яҡшылыҡҡа - рәхмәтле, ә яуызлыҡты онотоу өсөн мәрхәмәтле булырға кәрәк".*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

Белем көнө

30 АВГУСТ - 5 СЕНТЯБРЬ (УРАҒАЙ - ҺАРЫСАЙ)

2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№35 (609)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Үҙ телеңдәге һүҙҙәр ҙә...**



дауалау һәләтенә эйә

3

**Көслө илде билдәләүсе сифат...**



умартасылар ярышында асыҡланды

5

**Бала тәрбиәләгәндә...**



етди хаталарға юл ҡуйыҙ

8-9

**Яҡшыға кем дә яҡшы -**

яманға яҡшы булып ҡара!



12-13

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Мәктәбегеҙ яңы уҡыу йылына ниндәй әҙерлек менән килә? Хәл итеlә алмай ҡалған мәсьәләләрегеҙ бармы?

***Әлфир ҒАЙСИН, Рәми Ғарипов исемендәге Башҡорт республика гимназия-интернаты директоры:*** Яңы уҡыу йылын тулы әҙерлек менән ҡаршылайбыҙ. Быйыл гимназияны 156 бала тамамлап сыҡҡайны, һөҙөмтәләр, йылдағыса, бик ҡыуандырҙы: ошо уҡыусыларыбыҙҙың 90-95 проценты самаһы юғары уҡыу йорттарына уҡырға инде. Һигеҙенсе класҡа республикабыҙ райондарынан барлығы 160 бала (шуларҙың унлабы - Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән) ҡабул ителде. Уҡыу йорто корпустарына, класс бүлмәләре һәм кабинеттарға тулыһынса ремонт эшләнде, улар тейешенсә йыһазландырылды. Ә шулай ҙа иң ҙур яңылығыбыҙ шул: "Урал" хәйриә фонды ярҙамында гимназия-интернат биләмәһендә 60 миллион һумға бына тигән ҙур спорт комплексы төҙөлдө, "Шоңҡар" тигән ҡанатлы исем бирҙек уға. 540 һәм 300 кв.метр майҙанлы заманса йыһазландырылған ике залы бар. Әле унда спорт йыһаздарын ҡабул итеү һәм урынлаштырыу, шулай уҡ комплекстың эргә-тирәһен төҙөкләндереү эштәре дауам итә. Объект яңы уҡыу йылына тулыһынса әҙер, ул ошо көндәрҙә тантаналы рәүештә файҙаланыуға тапшырыласаҡ.

Быйыл матбуғатта уҡыусылар формаһы тураһында күп һүҙ алып барылды, ләкин беҙҙең өсөн был йәһәттән бына 8 йыл инде бер ниндәй проблема ла юҡ. Сөнки беҙ күптән үҙ формабыҙҙы булдырғанбыҙ: үҫмерҙәр ҡара костюм, аҡ күлдәктә, ә ҡыҙҙар элекке классик стилдә - яғаһы, ең остары аҡтан тегелгән күлдәк һәм аҡ алъяпҡыста йөрөргә күнеккән. Ә бына спорт формаһын һәр класс үҙенсә фасон һәм биҙәлештә хәл иткән. Футболкаларының түшенә һәм арҡаһына баланың исем-фамилияһы яҙылған. Уҡыу әсбаптары, дәреслектәр менән дә бер ниндәй проблема юҡ, фәҡәт бөтөн көстө тырышып уҡырға йүнәлтергә генә ҡала.

***Фәнил НУРИЕВ, Республика Башҡорт лицей-интернаты директоры:*** Нисек кенә үкенесле факт булмаһын, әммә яңы уҡыу йылын беҙгә үҙ бинабыҙҙа түгел, ә былтырғы кеүек үк, 5-се ҡала һөнәрселек училищеһына "өйҙәш" булып ҡаршыларға тура килә... Беҙҙең уҡыу корпусы авария хәлендә тип табылһа ла, ремонт мәсьәләһен һаман булһа хәл итә алмайбыҙ. Республиканың Мәғариф министрлығына ла, хатта унан юғарыраҡ кимәлдәргә лә мөрәжәғәт итеп ҡарауыбыҙ әлегә яуапһыҙ ҡала килә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, яңы уҡыу йылын яҡты өмөттәр бағлап ҡаршылайбыҙ, сөнки фиҙаҡәр эш һөҙөмтәләре үҙ емешен биреп тора. Күптән түгел булып үткән август кәңәшмәһендә билдәләнеүенсә, БДИ һөҙөмтәләре буйынса беҙҙең лицей күрһәткестәре иң яҡшыһы! Уҡыусы балалар, уларҙың ата-әсәләре араһында ла лицей ҙур абруй менән файҙалана, беҙҙең мәктәпкә инергә теләүселәр һәр саҡ сират тора - был да эшебеҙгә аныҡ баһа. Йыл һайын 7-се синыфҡа өсәр класс уҡыусы туплана. Улар математика, рус, башҡорт һәм сит телдәрҙән үткәрелеп килгән полиолимпиада һөҙөмтәләре нигеҙендә һәм балаларҙың дөйөм өлгәш кимәле, портфолио мәғлүмәттәренә ҡарап һайлап алына. Быйыл, мәҫәлән, бындай олимпиадала 3 меңгә яҡын бала ҡатнашты. Балаларҙың йәшәү шарттарына килгәндә иһә, ятаҡ, дөйөм туҡланыу мәсьәләләре буйынса зарланырлыҡ сәбәптәр юҡ, тиер инем. Мәғлүм булыуынса, беҙҙең лицей сит телдәр өйрәнеүгә, төп дисциплиналарҙы инглиз телендә уҡытыуға йүнәлеш тота, шуға күрә аҙаҡ аңлашылмаусанлыҡ килеп сыҡмаһын өсөн ата-әсәләр ошо предметтан өҫтәмә дәрестәр, факультатив сәғәттәр кәрәклеге тураһында ла хәбәрҙар булырға тейеш, тимәксемен.

***Рәшиҙә МОСТАФИНА, Өфө районы Шамонин дөйөм белем биреү мәктәбе директоры:*** Белеүегеҙсә, мәктәбебеҙ әле өр-яңы, беҙ унда ни бары дүртенсе уҡыу йылыбыҙҙы ҡаршылайбыҙ. Шуға күрә әллә ни ҙурҙан ҡубып ремонт эштәренә тотонорға тура килмәһә лә, кәрәк урындарын буяп, йыуып, тәҙрәләрҙе ялтыратып ҡуйҙыҡ - балаларҙы матур, яҡты, йәмле класс бүлмәләре көтә. Яңы уҡыу йылына әҙерлек нигеҙҙә шунан ғибәрәт булды: 1-се класҡа кескәйҙәрҙе ҡабул итеү эше менән шөғөлләндек. Шуныһы ҡыуанысլы: быйыл беҙҙең мәктәпкә 100 бала тәүләп аяҡ баҫасаҡ! Беренселәр генә лә, тимәк, тотош дүрт класс, тигән һүҙ, ә шуның икеүһе башҡорт класы буласаҡ. Башҡорт телен уҡытыу, милли кластар асыу йүнәлеше һаҡланасаҡ. Сөнки балаһын тап ошо кластарға бирергә тырышып тороусы ата-әсә байтаҡ булып сыҡты. Үҙебеҙҙең уҡытыу тәжрибәһенән дә күренеүенсә, башҡорт кластары ҡайһы яғы менәндер барыбер айырылып тора: балалар тыңлаусан, тәртипле, иманлы. Был әлеге ата-әсәләрҙең дә фекере. Туған тел, мәҙәниәт һәм сәнғәтебеҙ буйынса үткәрелеп килгән һәр төрлө конкурстар, байрамдарҙа ихлас ҡатнаша беҙҙең уҡыусылар. Мәҫәлән, үткән уҡыу йылында "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү, "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурстарында, "Байыҡ" балалар бейеү бәйгеһендә ҡатнашып, һайлап алыу турҙарын уңышлы үтергә, илһамланып сығыш яһарға насип булды балаларыбыҙға. Үҙҙәре, үҙҙәренән бигерәк ата-әсәләре бик ҡәнәғәт ҡалды. Шуны ла әйтеп китеү кәрәктер: Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты менән берлектә һәләтле балалар менән эш буйынса тәжрибә майҙансығы программаһын тамамлап, икенсе йүнәлештә - уҡытыуҙа электрон саралар ҡулланыу буйынса эш башланыҡ.

**(Дауамы 2-се биттә).**



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЙӘШТӘРЕБЕҘ...

## еңел аҡса артынан ҡыуа

**Фәниә ИСХАКОВА, иҡтисад фәндәре кандидаты, БДУ профессоры, Рәсәйҙең тәбиғәт фәндәре академияһы ағза-корреспонденты:** Оҙаҡ йылдар юғары уҡыу йортонда эшләгән кеше булараҡ, бер-нисә быуын йәштәрен сағыштырып, шуны әйтә алам: хәҙергеләр бигерәк һүлпән тойола миңә. Улар бер ниндәй йәмәғәт эштәрендә лә, сараларҙа ла ҡатнашырға теләмәй, һәр нәмәгә битараф ҡарай һымаҡ. Был халыҡтың, илдең милли идеяһы булмауҙан киләлер, тип уйлайым. Ҡыҙғанысҡа күрә, бөгөнгө көндә беҙҙең йәштәребеҙҙе берләштерерлек, әүҙемләштерерлек, янып йәшәтерлек дөйөм бер маҡсат юҡ. Йәштәр өсөн тегендә-бында төрлө ойошмалар булдырып ҡарайҙар, әтәргес рәүешендә хөкүмәт тарафынан да ниндәйҙер эштәр башҡарылғандай. Бәлки, йәштәр уларҙа ҡатнашып, әҙерәк эстәге төйөндәрен бушатҡан булалыр ҙа ул, әммә барыбер күңелдәрендәге уй-ниәттәрҙе, ташып торған дәрттәрен тормошҡа ашырып бөтөрә алмайҙар. Барыһын да бер маҡсатта эшләтерлек милли идеяны улай уйлап табып ҡына булмай шул. Ул үҙенән-үҙе, заманына, шарттарға ҡарап тыуырға тейеш. Шуға күрә, әлеге көндә булдырырға тырышҡан әллә күпме, ни тиклем яҡшы идеялар ҙа йәштәр тарафынан хуплау тапмай.

Бөгөнгө көндә юғары уҡыу йорттарында шундай хәл күҙәтелә: күптәр түләүле бүлеккә уҡырға инә. Тимәк, улар уҡыуҙа нисек кенә өлгәшһә лә, үҙҙәрен ҡыуып сығармаҫтарына ышана. Улар хаҡлы, ысынлап та, бер етәксе лә бындай студенттарҙы уҡыуҙан ҡыумай - вузға бит аҡса кәрәк. Һөҙөмтәлә, әлеге студенттар араһында ҡыҙыҡһынып уҡығандары, аласаҡ һөнәрҙәре буйынса карьера эшләргә ынтылыусылары бик һирәк. Элеккерәк замандарҙағы йәштәр кеүек, "Курсташым тик "бишле"гә өлгәшә, мин дә ҡалышмайым әле", йәки "Яҡшы уҡыһам, аҙаҡтан һәйбәт эш урыны аласаҡмын", тип уйламайҙар. Эштең дә еңелен эҙләйҙәр, хәҙер менеджерҙар, банк хеҙмәткәрҙәре, юғары белемле һатыусылар күбәйеп китте. Еңел аҡса, бай тормош артынан ҡыуалар. Йәштәрҙең тормошҡа ҡарашын хәбәр һөйләп, лекциялар уҡып ҡына үҙгәртеүе лә мөмкин түгел. Улар оло быуын кешеләренең фекерен ҡабул итеп тә бармай. Шулай ҙа йәштәргә тормоштарын үҙ ҡулдарына алыу өсөн маҡсатлы булыу, битарафлыҡтан арыныу кәрәк, тип әйтер инем.

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Мәктәбегеҙ яңы уҡыу йылына ниндәй әҙерлек менән килә? Хәл итеүә алмай ҡалған мәсьәләләрегеҙ бармы?

**(Башы 1-се биттә).**

***Илдар МОТАЛОВ, Ф. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһы директоры:*** Уҡыу йылына әҙерлекте район комиссияһы килеп тикшерҙе һәм ыңғай баһа бирҙе. Уҡыу әсбаптары, дәреслектәр етерлек, тик бына мәктәбебеҙҙең компьютер паркын яңыртыу талап ителә - быныһын, әлбиттә, тиҙ арала ғына хәл итеп булмаҫтыр, ахыры...

Яңы уҡыу йылында яңылыҡ булырҙай тағы шул хәбәрҙе әйтеп китер инем: быйылдан беҙ ата-әсәләр теләге буйынса ике йүнәлештәге профилле кластар булдырҙыҡ. Физика-химия һәм социаль-гуманитар фәндәрҙе тәрәнерәк өйрәнеүгә күсәсәк өлкән класс уҡыусылары, сөнки, һуңғы йылдарҙағы күҙәтеүҙәрҙән күренеүенсә, беҙҙең гимназияны тамамлаған йәштәрҙең күбеһе медицина һәм хоҡуҡ йүнәлешендәге һөнәрҙәрҙе һайлай. Әйткәндәй, балаларҙы социаль-гуманитар йүнәлеш буйынса әҙерләүҙә иң һыҙғанып эшләүсе егәрле уҡытыусыбыҙ - тарих фәндәре кандидаты Наил Әминевтың фиҙаҡәр хеҙмәтенә баһа биреп китеүҙе кәрәк тип табам. Ғөмүмән, гимназиябыҙҙа әҙерлекле, тәжрибәле кадрҙар эшләй, был йәһәттән проблемалар юҡ. Шуғалыр ҙа, күрәһең, ҡайһы бер алыҫыраҡ йәшәгән ата-әсәләрҙең дә балаларын беҙҙең гимназияға бирергә тырышып тороуы бер ҙә ғәжәп түгел. 1-се класҡа 90 бала ҡабул иттек. Был, бер яҡтан, ҡыуаныслы, әлбиттә, тик мәсьәләнең икенсе яғы ла бар: урын етешмәй. Нисек кенә булмаһын, былар яйлап хәл ителер, иң мөһиме - гимназия балаларға төплө, заманса белем биреү, йәш быуынды илһөйәрлек рухында тәрбиәләү эшенә әҙер.

***Гөлназ ӘХМӘҘИЕВА, М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы директоры:*** Үҙ көсөбөҙ менән ремонт эштәре үткәрҙек. Бигерәк тә ата-әсәләрҙең фиҙаҡәр тырышлығын күреү ҡыуаныслы: кабинеттарҙы, класс бүлмәләрен буяп, тәртипкә килтереп, йыһазландырыуҙа уларҙың ярҙамы бик ҙур булды. Йәй буйы 1-се класҡа киләсәк балаларҙың документтарын ҡабул иттек, ата-әсәләре, кескәйҙәрҙең үҙҙәре менән аралаштыҡ: быйыл 130 бала мәктәбебеҙ тупһаһына тәүләп аяҡ баҫасаҡ.

Мәғлүм булыуынса, быйыл октябрҙә Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 95 йыл тула. Беҙҙең гимназия арҙаҡлы яҙыусының исемен лайыҡлы йөрөтә, тип әйтә алам. Был юбилейға әҙерлекте беҙ күптән башланыҡ. Октябрҙә Мостай Кәрим һәйкәле янында уның әҫәрҙәренән өҙөктәр уҡып, флеш-моб үткәрергә ниәтләйбеҙ. Күренекле дата айҡанлы был сараға халыҡ шағирының ижадын һөйөүселәрҙе лә саҡырабыҙ.

Яңы уҡыу йылын башлап ебәргәндә үткән уңыштарҙы барлап алыу ғәҙәте лә бар. Беҙ хаҡлы рәүештә үҙебеҙҙең йәш шашкасыларыбыҙ, Европа беренселеге призерҙары - Рәсәй чемпиондары Марсель Шәрәфетдинов, Ридан Сафин, Айҙар Дәүләтов, Кристина Осипова менән ғорурланабыҙ. Быйыл июндә улар икенсе йыл рәттән шашка буйынса Сочи ҡалаһында үткәрелгән Рәсәй беренселегендә чемпион титулын яулап ҡайттылар. Улар Рәсәйҙә иң көслө тренер Александр Мельниковтың тәрбиәләнеүселәре.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Дуҫтарығыҙ, таныштарығыҙ араһында 2014 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө" гәзитенә яҙылырға оноҡҡандар барҙыр. Уларҙы иҫкәртегеҙсе әле: гәзитебеҙҙе октябрҙән алдыра башлау мөмкинлеге бар. Уның өсөн 17 сентябргә тиклем почта бүлексәләренә барып, 50665 индекслы гәзитебеҙгә яҙылып ҡуйһындар. Өс айға яҙылыу хаҡы 253 һум 80 тингә генә төшәсәк.**

• Шулай уҡ августан "Киске Өфө" гәзитенә 2015 йылдың тәүге яртыһы өсөн дә яҙылырға мөмкин. Яҙылыу миҙгеленең һәр айында уҡыусыларыбыҙ өсөн дәртләндереү сараһы барлығын да беләһегеҙ: был юлы ла **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"; "История башкирского народа"; С. Руденконың "Башкиры"; Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"; 2015 йылға "Башҡортса дини календарь"** һәм башҡа китаптарға лайыҡ булырға теләгәндәр 2015 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәрергә онотмаһын.



• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

• **Беҙҙең сайт:** *www.kiskeufa.ru.* Беҙҙең электрон почта: *info@kiskeufa.ru.* Беҙҙең блог: *blog. kiskeufa.ru.*

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов мәғариф системаһының 2014/2015 уҡыу йылына әҙерлеге мәсьәләләренә арналған видеоконференцияла ҡатнашты. Уны РФ Хөкүмәте рәйесе Дмитрий Медведев үткәрҙе. Башҡортостандың белем биреү системаһы бөтөн күрһәткестәр буйынса илдә дүртенсе урында тора. 3,5 меңдән ашыу белем усағында 882 мең кеше уҡый, уларҙа 40 мең педагог эшләй. Быйыл республикала адреслы инвестицион программа сиктәрендә 1369 урынлыҡ яңы өс мәктәп асыу планлаштырыла, 471 мәктәпкә капиталь ремонт үткәрелгән.

✓Туймазы районында үткән кәңәшмәлә республикала йәшелсә үҫтереү торошо, уларҙы һатыуға сығарыу мәсьәләләре тикшерелде. Унда ҡатнашыусылар шулай уҡ республикала Йәшелсәселәр берлеге төҙөү кәрәклеген дә белдерҙе. Әлеге мәлдә күмәк һәм шәхси хужалыҡтарҙың 16,1 мең гектар ерендә яҡынса 330 мең тонна йәшелсә үҫтерелә. Норма буйынса, йән башына йылына 120-140 кг йәшелсә тура килергә тейеш, тип иҫәпләгәндә, республика тағы ла 160 мең тонна йәшелсә етештерергә тейеш.

✓Республика һәм ил үҫешенә ҙур өлөш индергән 50 кеше Башҡортостандың дәүләт наградаларына лайыҡ булды. Улар араһында "Красноусол" санаторийы директоры Фаяз Мәзитов - "Башҡортостан Республикаһы алдындағы хеҙмәте өсөн" ордены, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Биохимия һәм генетика институтының бүлек мөдире Эльза Хөснөтдинова Халыҡтар дуҫлығы ордены, БР ауыл хужалығы министры урынбаҫары Владимир Незнанов Салауат Юлаев ордены менән бүләкләнде.

✓Өфө моторҙар производство берекмәһе 2013 йыл һөҙөмтәләре буйынса "Оборона сәнәғәте" тармағында Рәсәйҙең иң яҡшы экспортеры исемен алды. Былтыр экспорт күләме 631 млн долларға еткән, был етештерелгән продукцияның 58,9 процентын тәшкил итә. Берекмә Алжир, Венесуэла, Һиндостан, Индонезия, Ҡытай һәм Малайзияны авиация двигателдәре менән тәьмин итә. Был конкурс РФ Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы тарафынан йыл һайын үткәрелә, һуңғы 15 йыл эсендә Өфө берекмәһе унда 8-се тапҡыр билдәләнә.

*УЯН, УЙЛАН...*

# ҮҘ ТЕЛЕҢДӘГЕ ҺҮҘҘӘР ҘӘ...

## дауалау һәләтенә эйә



**Хәҙер кешенең, уны уратып алған мөхиттең, Ерҙең, Ғаләмдең, хатта бәләкәй генә бөжәктең, йәнһеҙ тип иҫәпләнгән бөтөн әйберҙең дә йәне, тимәк, энергияһы булыуы тураһында күп яҙалар, һөйләйҙәр. Уларҙың бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә йәшәүе, үҙ-ара энергия менән алышыуы фәнни яҡтан нигеҙләнгән. Шуға бәйле, кешенең ергә, туған телгә ҡарата мөнәсәбәте хаҡындағы фекерҙәргә ҡолаҡ һалайыҡ.**

Ер тигәндән, бында планета тураһында һүҙ бармай, әле төп иғтибарҙы үҙебеҙ тыуған, йәшәгән ергә йүнәлтке килә. Тағы ла аныҡлабыраҡ әйтһәк, кешенең үҙе йәшәгән йорт ихатаһына, урамына, урманына мөнәсәбәте нисек булыуы тураһында ине һүҙ. Шулай уҡ кешеләрҙең бер-береһе менән мөғәмәләһе лә ошонда уҡ инә. Әлбиттә, яҡшы мөнәсәбәттәбеҙ, игелекле мөғәмәләләбеҙ, тиерһегеҙ. Тәү ҡарашҡа, шулай кеүек тә бит, ә ысынында эштәр нисек тора һуң? Бөтөнләй киреһенсә. Йыш ҡына беҙ үҙебеҙ йәшәгән урынды, ундағы бер иш һоро йорттарҙы, аҙым һайын асарбаҡтар, гастарбайтерҙар осраған урамды күрә алмай китәбеҙ. Юлда транспорт тығындарында ултырғанда ирекһеҙҙән "енләнәбеҙ", тирә-йүнде тултырған пластик шешәләр, һыра йә кока-коланан бушаған ҡалай банкаларҙы, махсус сүп һауыттарында түгел, ә аяҡ аҫтында ятҡан тәмәке төпсөктәрен, төкөрөктәрҙе һәм башҡа хәшәрәттәрҙе күреп ерәнәбеҙ. Шулай итеп, күңелебеҙҙә насар хистойғолар ҡайнай, беҙ шул кире энергияны Ер-Әсәбеҙ менән бүлешәбеҙ. Уға шундай оятһыҙ мөнәсәбәттә булыр өсөн ул беҙгә ниндәй яуызлыҡ эшләгән? Ә бит ерҙең дә йәне бар, уның да рәнйеше төшөүе ихтимал (элек ололар шулай тип әйтә торғайны).

Ни эшләргә тейешбеҙ һуң? Был осраҡта бер генә юл бар: беҙгә бәйле булмаған бөтә нәмәгә нейтраль булырға, тыныс ҡалырға! Башҡалар ни эшләһә, беҙгә лә шуны эшләргә тимәгән бит. Иң мөһиме - һәр кем үҙен уратып алған мөхит менән берлегеН тойоп йәшәргә тейеш. Шул саҡта ғына кеше, мәҫәлән, тротуарға төкөрөү - ул үҙ битенә төкөрөү икәнен аңлаясаҡ. Шуны аңлаһағыҙ, тирә-йүнгә тик матурлыҡ ҡына сәсерһегеҙ, йәнәшәгеҙҙәге бөтөн нәмә менән килешеп йәшәрһегеҙ, һеҙгә йәшәйеш ҡанундары, Ғаләм закондары асылыр, ә унда һәммәһе лә камил, унда ығы-зығы, тәртипһеҙлек юҡ. Беҙ эргәбеҙҙәге урманға, яланға, йылғаға, һәр бер сәскәгә, япраҡҡа рәхмәт әйтеп, баш эйергә тейешбеҙ. Хоҙай Тәғәлә беҙҙе Ерҙәге ожмахҡа урынлаштырған бит - нисек шуны аңламайбыҙ?..

Ғөмүмән, беҙгә Ерҙәге үҙебеҙҙең урыныбыҙҙы, тамырҙарыбыҙҙы әхлаҡи йәһәттән дә, энергетик яҡтан да тойомлау зарур. Ә иң мөһиме - туған телебеҙҙе һаҡларға бурыслыбыҙ. Ул да тыуған ер, Ватан тойғоһоноң айырылғыһыҙ бер өлөшө. Туған тел тураһында ла күп яҙалар, ҡабатлап тороу кәрәкмәҫтер. Тик хәҙерге заман тикшеренеүҙәренә иғтибарығыҙҙы йүнәлткем килә.

**Мәҫәлән, туған тел - ул тәғәйен бер урынға хас өндәр вибрацияһы, ул ошо урындағы башҡа вибрациялар менән гармонияла тора. Иҫ киткес бит! Туған телеңдәге һин ҡулланған һүҙҙәр йыйылмаһы ни тиклем бай булһа (өҫтәүенә, уны даими рәүештә арттыра барһаң), үҙең дә энергетик йәһәттән шул тиклем көслөрәк буласаҡһың, тигәнде аңлата был.**

Хәҙер "цивилизация коды" үҙгәрҙе, бөтә нәмә ябайлаштырыла, америкаНлаштырылған жаргонға ҡайтып ҡала, тиһәләр ҙә, был ялҡауҙар өсөн генә шулайҙыр. Үҙ телеңде белеү мотлаҡ икәнен бер генә ғалим да, бер генә тикшеренеү материалы ла кире ҡаҡҡаны юҡ әле! Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: беҙ тыуып үҫкән ерҙә телебеҙ бик борондан йәшәп килә, уның тулҡындары (вибрацияһы) барлыҡ тирә-йүнгә үтеп ингән. Әгәр һеҙ баһалап бөтөргөһөҙ хазинаға - туған телебеҙгә эйә булһағыҙ, тирә-яҡ мөхит һеҙҙең организмығыҙ менән ыңғай резонансҡа инәсәк. Ә инде туған телен белмәгән "ғәрип" булһағыҙ, тыуған ерегеҙ һеҙҙе аңламаясаҡ та, бер нисек тә ярҙам да итә алмаясаҡ. Юҡҡа ғынамы ни, ауылда яҙыусылар, шағирҙар күберәк тыуа, улар тәбиғәт ҡосағында илһам ала, яҡшыраҡ яҙа. Кешеләр ҡалала йәшәһә лә, тыуған ауылдарына ҡайтҡылары килеп тик тора; сит илгә китһәләр - Тыуған илдәрен һағыналар; сит яҡтарҙа туған телендә һөйләшкән тауыш ишетһәләр - сикһеҙ шатланалар.

Үҙ ереңдә үҫкән ризыҡты ҡулланыу организм өсөн файҙалы, ә ситтән килтерелгәндәре зыянлы икәне лә иҫбатланды хәҙер. Шуның кеүек, үҙ телеңдәге һүҙҙәр ҙә дауалау һәләтенә эйә икән. Олоғайған кешеләр тыуған яҡтарына ҡайтып йәшәргә, һуңғы көндәрен шунда үткәреп, туған тупраҡҡа ятырға ашҡына, "тыуған ер тарта" тигән әйтем дә бар беҙҙең халыҡта. Был да юҡҡа ғына түгел. Ҡартайғас, кешенең энергияһы кәмей; тыуған ерҙән, туған телдән алмай, ҡайҙан алһын ул артабан ғүмер итерлек көсҡеүәтте, дәрт-дарманды?

Компьютер, гаджеттар заманында халыҡтар буталышҡан, телдәр, илдәр уртаҡ була барғанда, былар нимәгә, тип уйламағыҙ. Башта әйткәнемсә, башҡалар ни ҡылһа, һеҙ ҙә шуны ҡабатлап йөрөмәгеҙ. Тыуған ерегеҙҙән, туған телегеҙҙән айырылмағыҙ, уларҙы яратығыҙ, өйрәнегеҙ, тип әйткем генә килгәйне.

**Хәлиҙә АЛТЫНБАЕВА.**

*ФЕКЕР ТӨЙӨНӨ*

# ШИХАНДАРҒА ТЕЙМӘЙЕНСӘ ЛӘ...

## сода етештереп була

**Мәғлүм булыуынса, хәҙерге ваҡытта "Башҡорт сода компанияһы" акционерҙар йәмғиәте кальцийланған һәм аш содаһы продукцияһын ике химик матдә: аш тоҙо һәм эзбизташ (бурташ) ҡулланып етештерә.**



Был сеймал сығанаҡтары - Шихантау ятҡылыҡтары һәм Урман-Бишҡаҙаҡтың ер аҫты байлыҡтары республикабыҙҙың тәбиғәт байлығы булып иҫәпләнә. "Сода" производствоһында был тәбиғи матдәләрҙең 40 проценты файҙаланыла, ҡалған 60 проценты һыу ҡалдыҡтарына әйләнеп, дистиллирланған шыйыҡса, хлорлы кальций, эзбиз һөтө хәлендә "Аҡ диңгеҙ" бассейнына һәм ер аҫты скважиналарына ебәрелә. Һуңғы ваҡытта "Башҡорт сода компанияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте етәкселеге, Шахтауҙа бурташ запасы бөтә барыу сәбәпле, Шихандарҙы бирмәһәләр, "Сода" етештереү производствоһы туҡтатыласаҡ, ҡалала күп халыҡ эшһеҙ ҡаласаҡ, ҡала кассаларында аҡса аҙаясаҡ, тип тауыш күтәрә.

Ошо шау-шыуҙы иҫәпкә алып, шулай уҡ Шихандарыбыҙҙы бындай һөжүмдәрҙән яҡлауҙы ла күҙҙә тотоп, мин быйыл март айында "Башҡорт сода компанияһы" акционерҙар йәмғиәте етәкселәренә, сода продукцияһын аш тоҙон ғына ҡулланыу юлы менән дә етештереп була, тигән фекеремде тәҡдим иткәйнем. Был тәҡдимемде Стәрлетамаҡ ҡала округы хакимиәте башлығы Алексей Изотов һәм Башҡортостан Республикаһы Президентының техник советнигы Спартак Әхмәтовҡа ла еткерҙем. Шунан мин ҡала округы хакимиәтенән ошондай яуап хаты алдым:

*"Хөрмәтле Рәлиф Рәхим улы! Кальцийланған сода алыу мөмкинлеге ысулдарының береһе тураһындағы Һеҙҙең белдереүегеҙгә яуап итеп, түбәндәгеләрҙе хәбәр итәбеҙ. Һеҙҙең рационализаторлыҡ тәҡдимегеҙҙе ентекле өйрәнеү һәм эксперт һығымтаһы яһау маҡсатында Стәрлетамаҡ ҡала округы хакимиәте ул тәҡдимде Башҡортостан Республикаһының Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы Ғәмәли тикшеренеүҙәр институтына ебәрҙе. Институттан яуап алғандан һуң, Һеҙҙең тәҡдимегеҙгә ҡарата муниципалитет фекерен еткерербеҙ".*

Мин тәҡдим иткән ысул менән эшләгәндә "Сода" производствоһында ҡалдыҡтар, эшкәрткәндә ҡулланылған һыу ҡалдыҡтары бөтөнләй булмай. Киреһенсә, 1 тонна сода етештергәндә өҫтәмә рәүештә 1 тонна хлор барлыҡҡа киләсәк. Йәғни, технология ябайлаштырыла ғына.

**Рәлиф РӘХИМОВ,**
**техник фәндәр кандидаты, СССР-ҙың атҡаҙанған рационализаторы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған химигы.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓РФ Хөкүмәте ҡарары менән, Рәсәйҙең бер профилле муниципаль берәмеге (моноҡалалар) исемлеге раҫланды. Уның буйынса, республиканың 6 муниципаль берәмеге ҡаралған 3 категорияның 2-әүһенә индерелгән. Беренсе категорияға үтә ауыр социаль-иҡтисади торошо менән Бәләбәй һәм Күмертау инә. Нефтекама, Благовещен, Учалы һәм Белорет тотороҡло социаль-иҡтисади хәлдә тип иҫәпләнгән өсөнсө категорияға ҡарай.

✓Бөйөк Британияның Суонси ҡалаһында үткән еңел атлетика буйынса IPC Европа чемпионатында Рәсәй йыйылма командаһы дөйөм команда иҫәбендә 1-се урынға сыҡты. Командала Башҡортостандан 7 паралимпия спортсыһы ҡатнашты. Чемпионат һөҙөмтәләре буйынса, уларҙың барыһы ла яҡшы күрһәткестәр менән сығыш яһаған, ә Елена Паутова 1500 метрлыҡ араға йүгереүҙә Европа чемпионы титулын яулаған.

✓Рәсәй Банкы "1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы" серияһына ҡараған яңы биш һумлыҡ аҡсалар сығарҙы. Уларҙың дөйөм тиражы 6 млн дана буласаҡ. Мәскәү янындағы һуғышҡа арналған биш һумлыҡта Мәскәүҙе яҡлаусылар Монументы төшөрөлгән. Сталинград һуғышында ҡатнашыусылар иҫтәлегенә арналғанында Мамаев курганындағы мемориалдың фрагменты, Кавказ өсөн һуғышҡа арналғанында Эльхто ҡапҡалары һаҡсылары Монументы һүрәтләнгән.

✓"Тамыр" телеканалының "Ҡолонсаҡ" фильмы Хакасияла үткән "Евразия тауышы" Бөтөн Рәсәй милли тапшырыуҙар фестивале еңеүсеһе булды. Конкурста барыһы 200 теле- һәм радио тапшырыу ҡатнашҡан. "Ҡолонҡай" фильмына ике - "Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн иң яҡшы программа" һәм "Иң яҡшы оператор эше" номинациялары тапшырылған. Үҙ хыялына тоғро ҡала белгән малай тураһындағы фильм былтыр Архангел һәм Ғафури районДарында төшөрөлгән. Йәш геройҙы Өфө ҡалаһының 35 мәктәбе уҡыусыһы Данил Сәлихов уйнаған.

✓1 сентябрь көнө Салауат Юлаев һәйкәле эргәһендәге майҙанда "Сәләм, студент!" тип аталған концерт була. Ҡаланың Киров районы, "Юлдаш" мәғлүмәт-музыкаль каналы ойоштороған был байрамда башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары йәштәрҙе Белем байрамы менән ҡотлаясаҡ.

**“Башинформ”дан.**

✓ *"Балаларға белем дә бирербеҙ, ҡабатлау таблицаһын да ятлаттырырбыҙ, һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға ла өйрәтербеҙ, әммә әхлаҡи тәрбиә биреүгә иғтибарҙы арттырырға кәрәк", - тине Рөстәм Хәмитов.*



*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# ТАБЫНҒА ҺЫЙ ӘҘЕРЛӘҮҘЕ...

## ашнаҡсыға тапшыр



**Йәшәү ритмы көндән-көн тиҙләгеп арттыра. Был күренеш хәҙер ҡала халҡының ғына түгел, хатта үҙенең яй һәм һалмаҡ көнитмеше менән күнелгә яҡын ауылды ла баҫып бара. Нисек кенә булмаһын, барыһына ла өлгөрөргә тырышҡан кеше эшләргә лә, ял итергә лә яйын таба. Был йәһәттән мине бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ хайран ҡалдыра. Улар уңышлы эшҡыуарлыҡ алып барырға ла, дәүләт органдарында маҡтаулы хеҙмәткәр булырға ла, матур итеп донъяһын ҡарарға ла, балалар тәрбиәләргә лә, көн һайын ғаиләһен тәмлекәстәр менән һыйларға ла, дуҫтары менән осрашырға ла өлгөрә. Ләкин ниндәйҙер оло байрам уңайынан ойошторолған ҙур мәжлескә йыйыласаҡ ҡунаҡтарға табын әҙерләү хәстәре алдында улар ҙа баҙап ҡалырға мөмкин. Нәҡ ошондай саҡта уларға мин күрһәткән хеҙмәт ярҙамға килә.**

Үҙем көслө заттарҙан булһам да, аш-һыу менән булышырға бала саҡтан яраттым һәм ошо йүнәлештә һөнәр алдым. Әлеге көндә мин "ирекле" ашнаҡсы, йәғни тәғәйен ҡайҙалыр эшләмәйем. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ғаиләм аҡсаһыҙ ултырғаны юҡ: тәмле ашайбыҙ ҙа, йылы яҡтарҙа ял да итәбеҙ, фатирыбыҙ ҙа бар, ғөмүмән, етеш тормошта йәшәйбеҙ. Ә быларҙың барыһына ла үҙемдең һөнәрем, оҫталығым ярҙамында өлгәшәм - мин саҡырыу буйынса ашнаҡсы булып эшләйем. Ҙур ҡунаҡ йыйырға ҡарар иткән ғаиләләр мине саҡыра һәм мин улар төҙөгән менюға ярашлы аш-һыу әҙерләйем. Ҡайһы берҙә клиент үҙе һатып алған аҙыҡ-түлектән уның өйөндә бешерәнем, ҡайһы саҡта барыһын да үҙем һатып алып, өйҙә әҙерләп, тейешле адрес буйынса алып барып ҡына бирәм. Минең өсөн икеһе лә берҙәй ҡулай, шуға күрә был йәһәттән артыҡ өҫтөнлөк юҡ.

Быуа ошондай юл менән аҡса эшләйем һәм артабан да тик ошо эшмәкәрлек менән булырға иҫәбем. Үҙ эшенде яратып, намыҫ менән башҡарһаң, сифатты өҫтән ҡуйһаң, алдаҡҡа юл ҡуймаһаң - эш алға бара. Реклама йәһәтенән дә мәсьәлә юҡ - бер өйгә йыйылған ҡунаҡтар аш-һыуыңды оҡшатһа, "сарафан радио" үҙенән-үҙе эшләй башлай.

Кемдер берәү: "Ни өсөн махсус ашнаҡсы саҡырып ыҙаларға, магазинға сыҡтың да һатып алдың, хәҙер салатынан башлап эҫе аш-һыуға тиклем һатыла", тиер. Ләкин, беренсенән, был ҡунаҡ саҡырыусының кеҫәһенә һуға. Икенсенән, хужабикәгә үҙе теләгәнсә өҫтәл әҙерләү өсөн әллә нисә магазинды йөрөп сығырға тура килә, был да ваҡыт талап итә. Өсөнсөнән, махсус ашнаҡсы саҡырыу хужаларҙы кемдер ҡайҙалыр етештергән билдәһеҙ аш-һыу сифаты өсөн борсолоуҙан азат итә.

Гәзит уҡыусылар араһында ла тәмле аш-һыу бешереүсе, үҙ эшенең оҫтаһы булған ашнаҡсылар етерлек булыуына шикләнмәйем. Дуҫтар, һеҙҙе лә үҙемдең рәтемә саҡырам. Күңелегеҙҙе һалып башҡарған эшмәкәрлекте ҡулланып, ғаиләгеҙҙе генә түгел, башҡаларҙы ла тәмле аш-һыу менән һыйлағыҙ һәм аҡса ла эшләгеҙ.

**Морат УСМАНОВ.**
**Өфө ҡалаһы.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

**Уҡыған ил уҙыр, уҡымаған ил туҙыр, тигән хәҡиҡәткә таянып, ил етәкселеге белем биреү системаһы үҫеше проблемаларына иғтибарын йәлләмәй. Ошо көндәрҙә Өфө ҡалаһының мәғариф буйынса август кәңәшмәһендә лә актуаль мәсьәләләр күтәрелде, был йүнәлештә башҡарылған эштәргә йомғаҡ яһалды.**

# МӘҒАРИФ СИСТЕМАҺЫНДА...

## рухи тәрбиәгә урын булырға тейеш



Баш ҡаланың 243 балалар баҡсаһы, 131 мәктәп һәм 35 йүнәлешле өҫтәмә белем биреү учреждениелары, юғары уҡыу йорттарынан йыйылған педагогтар мәғарифта заманса технологиялар күргәҙмәһе менән танышты. Электрон белем биреү элементтары, өҫтәмә белем биреү технологиялары, интерактив дидактик материалдарҙы ҡарап сығыу балаға белем биреү өсөн үҙенә лә замана менән бергә үҫергә, артта ятып ҡалырға ярамағанлығына тағы бер ҡат төшөндөрҙө.

Баш ҡаланың мәғариф буйынса август кәңәшмәһенең пленар ултырышы барышында Өфө ҡалаһы хакимиәтенең мәғариф бүлеге етәксеһе Елена Хаффазованың сығышынан күренеүенсә, баш ҡалабыҙҙа йәш быуынды һәр яҡлап үҫтереү өсөн барыһы ла эшләнә. Мәҫәлән, дәүләт ҡарамағындағы балалар баҡсаларынан тыш, кескәйҙәр өсөн шәхси үҙәктәр күпләп асылған, 2011 йылдан 2013 йылға тиклем баш ҡалабыҙҙа 5 меңгә яҡын балаға өҫтәмә урын булдырылған. Мәктәп уҡыусыларына тейешле белем биреү ниәтендә 114 учреждениеға Интернет селтәре үткәрелгән, 42 кабинет "1 уҡыусыға - 1 компьютер" принцибы буйынса йыһазландырылған. Елена Роберт ҡыҙы әйтеүенсә, Өфө ҡалаһында мәғариф системаһын үҫтереү буйынса эштәр балаларға уңайлыҡтар тыуҙырыуҙан ғына тормай, тәү нәүбәттә, уҡытыусыларҙың хеҙмәтен тейешле баһалау зарур. Педагогтарҙың уртаса айлыҡ эш хаҡы үткән йылдағы менән сағыштырғанда ярайһы уҡ арткан, мәктәптәрҙә яҡынса 27 565 һум, балалар баҡсаларында - 22 051 һум, өҫтәлмә белем биреү учреждениеларында - 19 848 һум хеҙмәт хаҡы түләнә. Башҡортостан Республикаһы Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов билдәләүенсә, уртаса хеҙмәт хаҡы тураһында һөйләгәндә хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡы бер төрлө генә булмауы, күптәр бернисә вазифаны бер юлы башҡарыуын да иҫәпкә алырға кәрәк. Республика башлығы үҙ сығышында мәғариф системаһының төп проблемаларын һәм бурыстарын билдәләп, былай тине: "Әлеге мәлдә мәктәптәр, колледждар, юғары уҡыу йорттары бөтөн бер белем биреү системаһы буйынса эшләмәй. Белем биреү структуралары ҡеүәтле булһын өсөн был бәйләнеш бик кәрәк. Шулай уҡ, мәғариф системаһында матди етешлектәрҙән дә мөһимерәк нәмә - балаларыбыҙға рухи тәрбиә биреү мәсьәләһе бар. Бөгөнгө йәмғиәттә әхлаҡ төшөнсәһе үҙенең баһаһын юғалта бара. Бында мәктәп, йәмғиәт һәм дәүләт етәкселеге алып барған сәйәттән дөрөҫ юлдан тайпылыуы ла ғәйепле. Балаларға белем дә бирербеҙ, ҡабатлау таблицаһын ятлаттырырбыҙ, һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға ла өйрәтербеҙ, әммә әхлаҡи тәрбиә биреүгә иғтибарҙы арттырырға кәрәк", - тине Рөстәм Хәмитов.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәғариф системаһында ниндәй генә яңы закондар, яңы үҙгәрештәр ҡабул ителмәһен, әгәр ҙә беҙ балаларыбыҙҙа кешелеклелек тойғоларын, әхлаҡлылыҡ сифаттарын тәрбиәләй алмаһаҡ, алға китеш булмаясағын, ниһәйәт, аңланыҡ шикелле. Һәр алдыңғы дәүләтте белемле һәм үҙ илен, халҡын яратҡан шәхестәр тотоп тора. Шуға ла йәш быуынды уҡымышлы итеүҙән тыш, халҡына хеҙмәт итергә өйрәтергә кәрәктер, моғайын.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ТҮЛӘҮЛЕ ЮЛ ТӨҘӨЛӘ

**Ҡытайҙың Sinohydro Corporation компанияһы Башҡортостанда түләүле автомобиль юлдары төҙөргә ниәтләй. Бынан тыш, сит ил фирмаһы БР Үҫеш корпорацияһы менән берлектә Ағиҙелдәге индустриаль парк биләмәһендә айырым иҡтисади зона булдырыу тураһында һөйләшеүҙәр алып бара.**

Ҡытай компанияһы ҡатнашлығындағы бөтөн проекттарға ла урындағы төҙөлөш-монтаж ойошмалары йәлеп ителәсәк. Ошо көндәрҙә Ҡытай компанияһы Өфөлә үҙ вәкиллеген аса, был турала һөйләшеп килешелгән дә инде. Контракттар һәм проекттар арта килә төбәктә сит ил компанияһының үҙ штаты менән тулыландырылған офисы эшләй башлаясаҡ.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Ай дауамында һәр йома Башҡорт дәүләт медицина университеты клиникаһы табиптары районадарҙың үҙәк дауахаларында урындағы халыҡты ҡабул итәсәк. Күсмә бригада Иглин, Бүздәк, Дәүләкән, Шишмә райондарында булған да инде. Ауыл халҡы абдомаль хирург, ҡан тамырҙары хирургы, торакаль хирург, уролог, эндокринолог, кардиолог, ревматолог, невролог, гинеколог, травматолог, гематолог кеүек белгестәрҙән консультация аласаҡ.

✓Өфө ҡалаһы Октябрь районы хакимиәте башлығы итеп Александр Сопин тәғәйенләнде. Быға тиклем ул ҡаланың Граждандарҙы яҡлау идаралығы етәксеһе булып эшләне. Александр Сопин 1960 йылда тыуған, Ульянов гвардия юғары танк училищеһын һәм Рәсәй МЧС-ының граждандарҙы яҡлау академияһын тамамлаған. "Хәрби хеҙмәте өсөн" миҙалы менән бүләкләнгән, Башҡортостандың атҡаҙанған экологы.

✓Баш ҡалала Ибраһимов менән Цюрупа урамдары киҫелешендә 1906 квадрат метр майҙанды ремотлаясаҡтар. Унда асфальт, канализация люктары, металл тауҙар алыштырыла. Был урамдар йәшелләндереләсәк, газон түшәләсәк. Эштәр 30 ноябргә тамамланасаҡ.

✓Өфөлә 19 сентябрҙән 21 сентябргә тиклем XXIV Халыҡ-ара Аксаков байрамы үтә. Байрамдың төп саралары 19 сентябргә тәғәйенләнгән. Был көндә Аксаковтың йорт-музейында күргәҙмә асыла, яҙыусының һәйкәленә сәскәләр һалыу ойоштороласаҡ, Аксаков балы менән Аксаков кисе лә тантанаға йәм өҫтәйәсәк. 20 сентябрҙә байрам Бәләбәй районында дауам итә. 21 сентябрҙә Аксаков фольклор байрамдарын Өфө, Ҡырмыҫҡалы райондары ҡабул итә.

✓Өфө ҡалаһы хакимиәтенең опека һәм попечителлек буйынса идараһы "Планета" сауҙа-күңел асыу үҙәгендә Белем байрамы көнөндә етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм балаларға байрам бүләк итәсәк. Уның сиктәрендә "Беренсе тапҡыр - беренсе класҡа. Етем балаларға ярҙам ит" тип аталған хәйриә акцияһы ла ойоштоласаҡ. Ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов яҡлауындағы был акция дүртенсе тапҡыр үтә.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# КӨСЛӨ ИЛДЕ БИЛДӘЛӘҮСЕ СИФАТ...

## умартасылар ярышында асыҡланды



**Ырыҫ - тырыш ҡулында, тиҙәр. Был һүҙҙәрҙең хаҡ булыуы кеше тормошонда ғына түгел, бөтөн йән эйәләренең йәшәү рәүешендә лә сағыла. Шулай булмаһа, тырышлыҡтың төп һынланышы булып бал ҡорттарының уңғанлығы һаналмаҫ та ине. Ә шулай ҙа, бөгөн миңә: "Был донъяла иң тырыш йән эйәһен әйт", - тиһәләр, һис икеләнмәй: "Умартасы!" - тип яуап бирер инем. Яуабыма дәлилде оҙаҡ эҙләйһе лә түгел, ни бары ошо көндәрҙә Ғафури районының Красноусол ҡасабаһында уҙғарылған XIV Республика умартасылар һәм VIII "Йәш умартасы" республика конкурстарында ҡатнашыусыларҙың исемдәрен атау ҙа етер ине.**

Ойоштороусылар әйтеүенсә, өлкәндәр араһында үткәрелгән ярыштың шарттары быйыл ҡатмарлана төшкән: теоретик белемдәрен тест ярҙамында тикшергәндән һуң, конкурстың икенсе этабында уларҙың практик оҫталыҡтарын һынау өсөн алдағы йылдарҙа кеүек ике түгел, ә йәмғеһе дүрт күнекмә үткәреү ҡаралған. Улар бал ҡорттарын дүрт йыл миҙгеленә әҙерләү эштәренән ғибәрәт. Тәжрибәле умартасылар өсөн ҡыйынлыҡ тыуҙырмаҫлыҡ тойолһа ла, буш умарта менән нимә эшләргә кәрәклеген белеү өсөн махсус китап биттәрен асып ҡарамайса булмай икән. "Йәнле" умарталар менән эшләүе күпкә еңелерәк, уларға күҙ һалыу менән нимә талап ителеүен төшөнәһең. Шуға күрә, ете йыллыҡ тәжрибәм булыуға ҡарамаҫтан, бер аҙ албырғап та ҡалдым", - ти Әбйәлил районынан килгән бәйгесе Ринат Шаһыбалов. Конкурс сиктәрендә ҡатнашыусылар етештергән продукцияға быйыл беренсе тапҡыр экспертиза үткәрелеүе лә ярышҡа етдилек өҫтәне. Бәйгенең төп ойоштороусыһы, Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры Әмир Ишемғолов был хаҡта: "Балдың сифатына дөрөҫ эшмәкәрлек алып барыуы йәки бармауы менән умартасы ла тәьҫир яһай, тип иҫәпләйем. Шуға күрә, беҙ уларҙы ошо юҫыҡта тикшереп ҡарарға теләнек. Башҡорт балы - илебеҙҙең брендына әйләнеүен теләһәк, эшебеҙҙең сифатына иғтибарҙы арттырырға кәрәк", - тигән фекерен еткерҙе. Һәр нәмә артабан да үҫешһен, яңы кимәлгә күтәрелһен өсөн алда тағы ла ҡатмарлыраҡ маҡсаттар барлыҡҡа килергә, үтәлергә тейеш шул.

Бер һөнәр эйәләре йыйылған сараларҙа, ғәҙәттә, тәжрибә уртаҡлашыу, етди мәсьәләләрҙе хәл итеү урынына күптәрҙең битараф ҡалыуын күреп өйрәнгәнгәме, сәмләнеп үҙ-ара ярышыусы умартасыларҙың һәр урында бер-берееһенә кәңәш-төңәш итеүенә, белгәндәрен өйрәтергә тырышып йөрөүҙәренә тағы бер һоҡланырға тура килде. Өлкәндәр ярышының "Өйгә эш" тип аталған этабында умартасы эшен еңелләштергән яңы ҡорамалдар, төрлө ысулдар тәҡдим итеү, уларҙың практик әһәмиәте тураһында фекер алышыуҙа барыһы ла ихлас ҡатнашты, идея авторына һорауҙар бирҙе.

Шулай ҙа бөгөн умартасы өсөн әҙер балды ҡулланыусыға нисек итеп еткереү мәсьәләһе көнүҙәк булып тора. Мәсетле районы Һабанаҡ ауылынан килгән Энгельс Ғәлиәкбәров әйтеүенсә, балды үҙ баһаһына һатыу ҡыйынға төшә. "Иң тәүҙә умартасыларҙан балды тейешле хаҡҡа йыйып, ситкә сығарыу юлын табырға кәрәк. Бына әле беҙгә башҡа яҡтан бал килтереп һатыу юлдарын табалар, ә ниңә үҙебеҙгә Ер йөҙөндәге иң сифатлы балды икенсе илдәргә сығарыу сараларын эҙләмәҫкә? Шул юҫыҡта эш яңы башланған тип ишетеп ҡалғайным, яйға һалынһа, умартасыларға ҙур ярҙам булыр ине", - ти, умартасы. Ысынлап та, 30 баш умарта тотҡаны ла, 250 йәки 700 умартанан торған ҙур хужалыҡҡа эйә булғаны ла етештерелгән продукцияны ауылдаштарына, йәки сит өлкәләргә таныштары аша һатыуы тураһында һөйләне. Умарталар һанын арттырырға теләгәндә лә, быны нәҡ ошо сәбәптән генә тормошҡа ашыра алмай икән күптәр. Шулай ҙа башҡорт балын ситтәргә танытыу эшмәкәрлеге менән ныҡлап шөғөлләнеүсе Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры Әмир Ишемғолов был проблеманы ыңғай хәл итергә мөмкин булыуына ышандыра. "Республика территорияһында 535 мең тонна бал етештерергә була, уның 33 процентын алыуға өлгәшкәндә лә, 175 мең тонна бал килеп сығасаҡ. Ә беҙ бөгөн 6,5 тонна ғына етештерәбеҙ, - ти Әмир Миңлеәхмәт улы. - Бынан тыш, һуңғы йылдарҙа дәүләт тарафынан да умартасыларға ҡарата иғтибар артты, ҡортсолоҡто үҫтереү буйынса дәүләт программалары эшләй башланы". Ауыл хужалығының иң перспективалы өлкәһенә дәүләт ярҙамы бик мөһим шул. Мал тотоу килем килтермәһә лә, күҙ ҡараһындай тәрбиәләп торған бал ҡорттары ауыл халҡының бер аҙ аҡса эшләүгә өмөтөн аҡларға тейештер, моғайын.

XIV Республика умартасылар конкурсында Башҡортостандың 44 төбәгенән йыйылған 55 бәйгесе араһынан иң-иңдәрҙе һайлауы еңел булмаһа ла, Ауырғазы районы "Оҫҡон" ауыл хужалығы етештереү комплексынан Семен Иванов еңеүсе тип табылды. Ә VIII "Йәш умартасы" республика конкурсында беренселекте Ғафури районы Сәйетбаба ауылы мәктәбенең 9-сы класс уҡыусыһы Азамат Исхаҡов яуланы. Был ике конкурс һөҙөмтәләре буйынса билдәләнгән иң яҡшы умартасылар нәҫеле исеме Тәтешле районынан Леонид Байдуллин һәм уның туғаны Линар Зидымышевтарға бирелде. Уларҙы баһалаусы жюри ағзалары әйтеүенсә, балалар мәрәйҙәр һаны буйынса тәжрибәле умартасыларҙан һис тә ҡалышмаған. Тимәк, конкурстың төп маҡсаттарының береһе - быуындар араһындағы бәйләнеште тергеҙеү, бәләкәйҙән үҙ кәсептәребеҙҙең береһенә ҡарата бала күңелендә һөйөү уятыу, был изге шөғөлөбөҙҙө аманат итеп тапшырырлыҡ йәштәр үҫтереү теләге тормошҡа аша.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Гөж килеп, йә бер ергә өймәкләшеп шаулашып китеүсе, йә ҡапыл таралып һәр ҡайһыһы үҙ эшенә мөкиббән йомолоусы умартасыларҙы ситтән күҙәтә йөрөгәндәр, уларҙың үҙҙәрен дә бал ҡорттарына оҡшатҡандыр, моғайын. Көндөң эҫе булыуына, конкурс шарттарының ҡатмарлығына иҫтәре лә китмәне уларҙың. Бары тик эшһөйәр бал ҡорттарылай башҡара торған эштәрен еренә еткереп үтәргә тырышып, йүгерешеп йөрөнөләр. Көслө умарта геүләүенән билгеле булған кеүек, көслө ил дә бына ошондай сараларҙа бер-береһенә битараф булмаған, йәштәрҙе үҙ артынан эйәртә алған уңған кешеләре менән билдәләнә икән дәһә!**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## БАЛАНЫ ТЕРКӘТЕҮ

**Законлы никахта тыуған балабыҙға 10 ғына көн. Ирем айырылышыуҙы талап итә, баланы ЗАГС органында теркәүгә ҡаршылыҡтар тыуҙыра. Һөҙөмтәлә мин бала өсөн түләнгән айлыҡ пособиенан ҡалыуым бар. Иремде баланы теркәүгә нисек мәжбүр итергә?**

- Рәсәй Федерацияһы Ғаилә кодексының 17-се статьяһына ярашлы, ҡатыны ауырлы булған саҡта һәм бала тыуғандан һуң бер йыл дауамында ир никахты тарҡатыу буйынса эш ҡуҙғата алмай.

Законлы никахта булыуығыҙ һеҙгә ЗАГС органына үҙегеҙгә генә, йәғни ирегеҙҙе йәлеп итмәйенсә лә, мөрәжәғәт итеү һәм тейешле документты алыу хоҡуғы бирә. Бының өсөн ҡулығыҙҙа үҙегеҙҙең һәм ирегеҙҙең шәхесте раҫлаусы документтар (паспорт), бала табыу йортонда бирелгән белешмә һәм никахта тороу тураһындағы таныҡлыҡ булырға тейеш. Законлы никахта тормаған осраҡта ғына ЗАГС органына баланың ата-әсәһенең икеһенә лә барырға тура киләсәк.

## АТАҺЫ ХӘРБИ ХЕҘМӘТТӘ

**Балабыҙға 2,5 йәш. Ирем армияла булған осорҙа уға хәрби хеҙмәткәр балаһы булараҡ, айлыҡ пособие тәғәйенләнде һәм түләнде. Ишетеүемсә, бындай пособие балаға өс йәш тулғанға тиклем түләнергә тейеш. Ләкин райондың халыҡты социаль яҡлау органы ирем хәрби хеҙмәт ваҡытын тултырып өйгә ҡайтҡас, пособиены түләүҙән туҡтаны. Улар законға ярашлы эш итәме?**

- Рәсәй Федерацияһының "Балалары булған граждандарға дәүләт пособиелары тураһында"ғы Федераль законға (12.6-сы статья) ярашлы, саҡырыу буйынса хәрби хеҙмәттә булыусының балаһына бала тыуған көндән алып хәрби хеҙмәттән бушатылған көнгә тиклем пособие түләнә. Бала атаһы хәрби хеҙмәткә алынғанға тиклем тыуған осраҡта, пособие граждандың хәрби хеҙмәт үтәй башлаған көнөнән һәм, ярашлы рәүештә, хәрби хеҙмәттән бушатылған көнгәсә, тәғәйенләнә. Шуға күрә халыҡты социаль яҡлау органының пособие түләүҙе туҡтатыуы нигеҙле.

## ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫ ТЕЙЕШМЕ?

**Ғаиләбеҙҙә икенсегә бала тыуҙы. Беренсе ҡыҙыбыҙға 21 йәш. Әсәлек капиталын алырға хоҡуғым бармы?**

- Икенсе (өсөнсө һәм унан һуңғы) балаға әсәлек капиталына хоҡуҡ биреүсе сертификат алыу өсөн беренсе баланың нисә йәштә булыуы мөһим түгел. Сертификатты юллау өсөн урындағы Пенсия фондына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Остеохондроз

❖ Ныҡ бешкән ҡыярҙы ҡырғыстан үткәрергә, һутын һығып алырға, бер аҙ бал өҫтәргә, етен туҡыманы манып, һыҙлаған тубыҡтарға, билгә һалып, өҫтөнә полиэтилен, шарф менән бәйләргә.

❖ Кис һайын диңгеҙ тоҙон йылытып, сепрәк моҡсайға һалып, ауыртҡан урынға һалырға. Компресты тоҙ һыуынғансы тоторға. Һыҙлау баҫылһын өсөн ҡайһы саҡта өс көн дауаланыу ҙа етә.

### Радикулит

❖ 100 грамм камфара спиртына 50 грамм 5 процентлы йодты ҡушып болғатырға. Ҡулланыр алдынан йылытырға. Иртән һәм кисен һыҙлаған урынға ышҡырға.

### Аяҡтар шешенһә

❖ Эмаль һауытта шырпы ҡабы ҙурлығында балауыҙ иретергә, уға 1 стакан таҙартылмаған үҫемлек майы, бешерелгән йомортҡа һарыһы өҫтәргә, болғарға. Тубыҡҡа тиклем ошо майҙы һөртөп, таҙа сепрәк менән урарға, өҫтөнән ойоҡтар кейеп, 4 сәғәт тоторға. Дауаны көн һайын, аяҡтар шешеүенән туҡтағансы дауам итергә. Бының өсөн ҡайһы берҙә 15-17 процедура кәрәк. Дауаның шифаһы булһын өсөн бер юлы етен төнәтмәһе эсергә. Төнәтмә әҙерләү: 4 ҡалаҡ етен орлоғон эмаль һауытҡа һалып, 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға, ҡайнау хәтенә еткерергә, 5 минут талғын утта ҡайнатырға, һыуынғансы төнәтергә. Һәр 2 сәғәт һайын яртышар стакан эсергә.

### Полиартрит

❖ 300 г аҡ сәскә үләненә 5 литр ҡайнар һыу ҡойорға, һөҙөргә, ванналағы һыуға өҫтәргә, 20 минут ятырға. Көн аша эшләргә. Дауалау курсы - 10-15 ванна.

### Гемоглобин

❖ Кишер һуты ҡанды таҙарта, сөгөлдөр һуты гемоглобинды күтәрә, ҡандың составын яҡшырта, кәбеҫтә һуты - яҡшы таҙартыусы, унда көкөрт, хлор һәм йод күп, ашҡаҙанды таҙарта.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# РАМАҘАН

**Был изге айҙа мосолмандар ураҙа тота. Өлкән йәштәгеләр, ауырыуҙар, ауырлы һәм бала имеҙгән ҡатындар, юлсылар, сабый балаларҙан тыш, һәр кеше ураҙа тоторға бурыслы, тип иҫәпләнә.**

Иртәнге аш - сәхәр яҡтырыр алдынан яҡынса бер сәғәт тирәһе алдан ашала. Башҡорттар ураҙаға күп итеп талҡан әҙерләп ҡуйған һәм сәхәрҙә һөткә, ҡаймаҡҡа, ҡайнатылған һыуға йәки сәйгә болғатылған талҡан ашағандар. Йыш ҡына бутҡа бешергәндәр, уға күп итеп май һалғандар, туҡмаслы һөт ашы, ҡайһы берҙә һыуытылған ит тәҡдим ителгән. Сәйгә ондан бешерелгән ризыҡтар, һөт аҙыҡтары ҡуйғандар. Ураҙа ваҡытында туҡланыу туҡлыҡлы булған, артыҡ зиннәтле ризыҡтар ашамағандар, сөнки ураҙаның төп асылы ла ашауҙан һәм башҡа теләктәрҙән тыйылып тороуҙан ғибәрәт. Киске аш ҡояш байығас рөхсәт ителгән. Әгәр ҙә сәғәт булмаһа, ваҡытты сама менән билдәләгәндәр. Мәҫәлән, ҡул һуҙымында аҡ төҫтәге епте күреп булмаһа, ауыҙ асыу мәле еткән була. Ауыҙ асыу - икенсе төрлө ифтар - доғанан башланған, унан һуң йөҙөм, киптерелгән башҡа берәй емеш ашарға, тоҙ тәмләргә, бер нисә тамсы һыу эсергә яраған. Ҡайһы берәүҙәр түбәндәге ҡағиҙәне тотҡан: тәүге ун көн - һыу, киләһе ун көн - тоҙ, ҡалған ун көндө йөҙөм менән ауыҙ асҡан. Киске табынға мулла, ҡунаҡтар саҡырыу дөрөҫ һаналған. Ураҙа ваҡытында кеше өс тапҡыр ҡунаҡҡа барырға, өс тапҡыр үҙендә ҡунаҡтар йыйырға тейеш булған. Саҡырылмай килеп ингән ҡунаҡ иң хөрмәтлеһе иҫәпләнгән, уны Аллаһы Тәғәлә ебәргән, тигәндәр һәм яҡшы итеп һыйлағандар. Әгәр ҙә көндөҙ юлсылар йәки башҡа диндәге кешеләр килһә, уларҙы ашатып ебәргәндәр, әммә үҙҙәре ризыҡҡа ҡағылмаған.

Ураҙа тамамланғас, мосолмандар өсөн ҙур байрам килгән. Ул Ураҙа байрамы йәки Ураҙа ғәйете тип йөрөтөлә. Уға итле, майҙа бешкән ҡамыр ризыҡтары әҙерләгәндәр. Йылайыр районында яҙып алынған мәғлүмәт буйынса, Ураҙа байрамының төп һыйы булып тары бутҡаһы торған, уны яңы ҡаймаҡ менән биргәндәр. Байрамдың тәүге көнөндә туғандарҙы һәм күршеләрҙе саҡырғандар. Һуңынан башҡаларға ҡунаҡҡа йөрөүҙәр башланған. Мосолман байрамдарында йәштәр һәм ололар өй һайын йөрөп, хужаларҙы ҡотлағандар, "Ураҙағыҙ ҡабул булһын!", тип теләк әйткәндәр. Хужалар уларға ит киҫәктәре, ҡамыр ризыҡтары, тәм-том биргән. Көньяҡ-көнсығыш районларҙа был йоланы байрамсылау йәки әйселәү тип йөрөтәләр.

Мосолмандар араһында был байрамды үткәреүҙә айырмалыҡтар ҙа осрай. Ислам дине йолаларын теүәлерәк үтәгән төбәктәрҙә байрамда йышыраҡ өйҙә ултырғандар, уны күңел асмай ғына үткәргәндәр. Көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығышта халыҡ күмәкләп байрам иткән, йәйгеһен тәбиғәт ҡосағына сыҡҡан. Байрам итеү был яҡтарҙа оҙонға һуҙылған, ҡайһы саҡта 7 көндән 15 көнгә тиклем дауам иткән. Ә көньяҡ-көнбайыш районларҙа 3 көндән артыҡ байрам итмәгәндәр.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА*

# САБЫЙҘАРЫБЫҘ...

## уйнай-уйнай үҫһен!

**Заман үҙгәрә, шуның менән беҙ ҙә үҙгәрәбеҙ, хатта һәр замандың балалары ла төрлө була икән. Сабыйҙар ҡайһы заманда ла шул уҡ була инде, тиерһегеҙ. Миңә ҡалһа - юҡ. Мәҫәлән, хәҙер биш йәшлек балалар ҙа компьютерҙа "иркен йөҙә", техниканы беҙҙән былайыраҡ яҡшы белә. Башҡаса булмайҙыр ҙа, улар бит тыуғандан алып ошо цифрлы мөхиттә үҫә, шуға яраҡлаша, был уларға яңылыҡ түгел.**



Ауылға ҡайтҡанда ла айырма һиҙгәнем бар: ҡышҡыһын беҙ бала саҡта шып-шыма булып ятҡан Мәсет тауы тыныс ҡына ҡалын көрт аҫтында ята (миңә ҡалһа, уға ла күңелһеҙ һымаҡ) - бер кем сана шыумай. Урам шаулатып "Ун ике таяҡ", "Аҡ-тирәк, күк-тирәк" уйнаусыларҙы ла һирәк күрәм. Балалар юҡ икән, тип уйламағыҙ - бар улар, тик өйҙә йәнһүрәт ҡарай, компьютерҙа ултыра, тетрис уйнай...

Сабыйҙар хәрәкәтләнеп, нимәлер уйлап сығарып уйнарға тейеш. Уйнаған саҡта улар төрлө яҡлап: физик, аҡыл, эмоциональ кимәлдә үҫешә. Тағы ла дөрөҫ һайланған уйындар сабыйҙарҙы әхлаҡ, әҙәп, хеҙмәт яғынан тәрбиәләүгә лә булышлыҡ итә. Улар уйнай-уйнай тормоштоң төрлө ауырлыҡтарына бирешмәҫкә, уңышһыҙлыҡтар алдында ебеп төшмәҫкә, еңелгән осраҡта үҙен тота белергә, иптәштәре менән аралашырға, бәйләнеш булдырырға өйрәнә. Уйын ваҡытында баланың телмәре, фекерләү ҡәүәһе, зиһене үҫешә, сөнки бала был саҡта күптәр менән бәйләнешкә инә, яңынан-яңы һүҙҙәр ишетә, үҙе лә уларҙы ҡулланырға тырыша. Ата-әсәләр сабыйҙары менән өйҙә лә, урамда ла, сәфәр ваҡытында ла уйнай ала. Мин бөгөн үҙебеҙ бала-саҡта йорт эсендә уйнап үҫкән уйындарҙы иҫкә төшөрөп, уларҙы һеҙгә лә тәҡдим итергә булдым.

**"Бутыр-бутыр бутҡа бешкән".** Бишалты айҙан алып ике йәшкәсә балаларҙы алға ултыртып:

*Бутыр-бутыр бутҡа бешкән,*
*Уртаһына сыҫҡан төшкән.*
*Уны алайым тигәнсе,*
*Биш бармағы ла бешкән,* - тип һамаҡларға, унан бәпестең һәр бармағын бөгөп, быныһы - атайға, быныһы - әсәйгә, быныһы - өләсәйгә, быныһы - олатайға, быныһы - һиңә, тип һанап сығырға. Был кескәй сабыйҙар өсөн бик файҙалы уйын, унын күңеле күтәрелә, кәйефе яҡшыра. Ғалимдар фекеренсә, ошондай уйындар бармаҡтарҙың ваҡ моторикаһын үҫтереп кенә ҡалмай, ә баш мейеһенең эшсәнлеген әүҙәмләштерә һәм баланың хәтере, иғтибары, ишетеү, күреү һәләте лә яҡшыра.

**"Айыу, бүре юҡ икән...".** Был уйынды өйҙә бер нисә бала йыйылғанда уйнатырға мөмкин. Бер-ике йәшлектәрен дә бәләкәй тип ситтә ҡалдырмағыҙ, улар шулай бергә уйнарға өйрәнә, отоп ала. Бер бала иҙәндә айыу булып, битен ҡаплап йомарланып ята. Ҡалғандары еләк йыйырға килә һәм айыуҙы уратып йырлай: "Айыу, бүре юҡ икән, бында еләк күп икән...". "Айыу" йоҡлаған булып шым ғына ята һәм ҡапыл тороп, уларҙы баҫтыра башлай. Кемеһен тота - шул айыу була. Был уйын шул яғы менән файҙалы: балалар йүгереп, хәрәкәтләнеп кенә ҡалмай, уяу, сос, етеҙ булырға ла өйрәнә.

**"Һәпәләк".** Бер баланың күҙен бәйләйҙәр. Ҡалғандары уны уратып шым ғына ҡаса. Күҙе бәйләнгән бала уларҙы ҡыуып тоторға тейеш. Кемде тотһа - шуның күҙе бәйләнә. Был уйынды уйнағанда ишетеү һәләте үҫешә, кескәйҙәр күҙе бәйле килеш һәр ҡыштырлауҙы ишетеп, шул яҡҡа йүнәлергә, ҡасыусыларҙы тота алырға тейеш. Шулай уҡ бала иғтибарлы, зирәк булырға өйрәнә, унын хәрәкәт координацияһы үҫешә.

**"Йәшенмәк".** Бер йәш тулмаҫ элек үк бәләкәсегеҙ менән был уйынды уйнай башлағыҙ. Эҙләп табыуы еңел булған урынға йәшенегеҙ һәм балаға үҙегеҙҙе табырға ҡушығыҙ. Башта атаһы менән эҙләп өйрәнһен. Һуңынан уйындың айышына төшөнөп алғас, үҙе үк ҡыҙыҡһынып уйнай башлаясаҡ. Бәләкәскә еңелерәк булһын өсөн йәшенеп торғанда "Кә-күк" тип тауыш бирегеҙ. Бала тауыш буйынса һеҙҙе эҙләп табасаҡ. Үҫә барған һайын уйынды ла ҡатмарлаштырығыҙ. Был уйын да кескәйҙәрҙә иғтибарлылыҡ, ҡыҙыҡһыныусанлыҡ сифаттарын тәрбиәләй, ишетеү һәләтен үҫтерә.

**"Алма, груша, сейә, туп..."** Был уйынды бер нисә бала менән, шулай уҡ өйҙә бәпесегеҙ менән үҙегеҙ генә булғанда ла уйнай алаһығыҙ. Башҡалар теҙелеп ултыра, алып барыусы алмашлап уларҙың һәр береһенә туп бирә. Биргән саҡта ниндәй ҙә булһа һүҙ әйтергә тейеш. Ашай торған нәмә булһа - тупты тоторға, ашарға ярамағаны булһа - кире ҡағырға кәрәк. Был уйын да бик әһәмиәтле, ул кескәйҙәрҙең етеҙлеген, сослоғон, иғтибарын арттыра.

**"Әшкәк, бәшкәк, ҡара һыйыр һоп!".** Был әсәйемдәр бала саҡта уйнап үҫкән уйын. Беҙ ҙә уны уйнап үҫтек, хәҙер ҡыҙым уйнай. Уйындарҙың быуындан-быуынға күсә килеүе - ҡалай матур күренеш! Был уйын балалар ныҡ ҡуҙғып киткәндә, уларҙы ултыртып ҡына уйнатып алыу өсөн ҡулай. Түңәрәккә теҙелешеп ултыралар, ҡулдарын йоҙроҡлап башбармаҡтарын күтәрәләр һәм бер-береһенекен тотоп, бағана яһайҙар ҙа, һелкетеп: "Әшкәк-бәшкәк, ҡара һыйыр һоп!" - тиҙәр. Шунан һуң барыһы ла иренен ҡымтып, шым ғына ултыра. Төрлөсә ҡыланып, бер-беренде көлдөртөргә тырышырға мөмкин. Кем беренсе көлә йәки тауыш сығара, шунан: "Кемдең өйөнә ҡунаҡҡа барҙың?" - тип һорайҙар. Ул берәй ғаиләнең исемен атай. Шул ғаиләлә күпме кеше йәшәй, унын маңлайына шунсама сиртәләр. Был уйын сабыр, түҙем булырға өйрәтә, шулай уҡ кескәйҙәрҙең хәтерен нығыта.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баламды яңынан тәрбиәләү мөмкинлеге булһа, унының менән уйнар ҙа уйнар, уйнар ҙа уйнар инем, тигән бер ғалим. Хаҡ һүҙҙәр. Ысынлап та, беҙ үҫеп килгән сабыйыбыҙҙың иң мөһим, иң матур осорон донъя артынан ҡыуып, ваҡыт етмәүгә һылтанып, мәшәҡәттәрҙән арып, уға тейешле иғтибар бүлмәй уҙғарып ебәрәбеҙ. Сабыйҙар мотлаҡ йүгереп, сабып, хәрәкәтләнеп, тәкмәс атып уйнарға тейеш - был уларҙың тәбиғи хәле. Буш ваҡытығыҙҙа сабыйығыҙ менән бергә булырға, компьютер артында түгел, ә хәрәкәтләнеп, аралашып, төрлө уйындар уйнарға тырышығыҙ. Был бик мөһим, һеҙ бит шул рәүештә сабыйығыҙҙы тәрбиәләйһегеҙ, үҫтерәһегеҙ, буласаҡ шәхескә нигеҙ ҡораһығыҙ! Уларҙы төрлө уйындарға ылыҡтырығыҙ, әле бит уларҙың уйнап туймаҫ саҡтары!**

**Гөлнәзирә ЗӘЙНУЛЛИНА.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

# КҮҢЕЛ - ДАРЪЯ...

## баш - әрйә

- Еңел уйлаған еңел ҡолаған.
- Еңел тапҡан мал - елгә осҡан саң.
- Күңел - даръя: ғәләмдәрҙе ҡыҙыра, баш - әрйә: бөтөн уй-хистәрҙе һыйҙыра.
- Һине һөймәҫ ҡаршы сығыр, өйөнә һис индермәҫ.
- Тәмһеҙ аҙыҡ тәнгә һеңмәҫ, әрһеҙҙәрҙе әҙәм һөймәҫ.
- Төнгө тауыш - һауаны, яман һүҙ йөрәкте яра.
- Аңһыҙ йөрөгән - аңһыҙ үлгән.
- Үлсәүле мал йортҡа ҡуныр, үлсәүле һүҙ күңел йылытыр.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**Урта быуаттарҙа башҡорттарҙың һаны күпме булған? Улар ниндәй ерҙәрҙә йәшәгән? Ҡайһы бер тикшеренеүселәрҙең, башҡорттар аҙ һанлы милләт булған, тигән ҡараштары, ә икенселәренең халыҡтың тарихын бер нисә быуат менән генә сикләргә тырышыуҙары дөрөҫлөккә тап киләме? Ҡыҙыҡ, шул уҡ ваҡытта тарих фәне өсөн ҡатмарлы һорауҙарға яуапты тарих фәндәре кандидаты, Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты доценты Фуат СӨЛӘЙМӘНОВ менән бергәләп эҙләйбеҙ.**

# УРТА БЫУАТТАРҘА БАШҠОРТТАР ҺАНЫ



### Хәҙерге заман фараздары

XIX быуат аҙағы XX быуат башында ғәрәп һәм фарсы телендәге тарихи сығанаҡтарҙы урындағы мосолман ғалимдары өйрәнә башлай, тәржемә итә, комментарийҙар яҙа. Ошо йүнәлештә эшләгән зыялылар Шиһабетдин Мәрджәни менән Морат Рәмзиҙең хеҙмәттәрендә башҡорттарҙың Урта быуаттарҙағы тарихына ҡағылышлы мәғлүмәт осратырға мөмкин.

Был ғалимдар фекеренсә, Урта быуат дәүерендә башҡорттар күп һанлы милләттәр исемлегенә инә. Тикшеренеүселәр быны күп дәлилдәр менән раҫлай. Шуларҙың ҡайһы берҙәренә туҡталып китәйек. Билдәле дин әһеле, ғалим, тарихсы, Көнсығыш телдәрен яҡшы белеүсе Шиһабетдин Мәрджәни X быуат ғәрәп сәйәхәтсеһе Әл-Истахриҙың хеҙмәттәренә мөрәжәғәт итә. Ә был хеҙмәттә ғәрәп сәйәхәтсеһенең башҡорттарға ҡағылышлы әйтелгән: "Башҡорттар ике төркөмдән тора. Уларҙың бер төркөмө оғуҙҙар яғында, Болғарҙан арыраҡ йәшәй һәм уларҙың һаны 200 мең кешегә етә", тигән һүҙҙәре килтерелә.

Көнсығыш телдәрен һәм тарихи сығанаҡтарҙы яҡшы белгән икенсе тикшеренеүсе Морат Рәмзи ҙә ғәрәп яҙмаларына һылтанма яһап, Мәрджәниҙең дәлилдәрен нығытып, шулай уҡ башҡорттарҙың ике йөҙ мең кеше булыуы хаҡында мәғлүмәт бирә.

Бөгөнгө көн тикшеренеүсеһе Ғ.Х. Оморҙаҡов башҡорттарҙың һанына ҡағылышлы хеҙмәтендә алда телгә алынған ғалимдарҙың ҡараштарын нығытҡан бик ҡыҙыҡлы фактлар килтерә. Ул билдәле демограф Б.Ц. Урланистың эштәренә мөрәжәғәт итә, уларҙы Урта быуат тарихсылары, сәйәхәтселәре яҙмалары менән сағыштыра. Үткән быуатта йәшәгән совет демографы иҫәпләүҙәре буйынса, икенсе меңъйыллыҡтың башында (XI быуат) Урал һәм Волга буйында йәшәгән болғарҙарҙың, башҡорттарҙың һәм ҡыпсаҡтарҙың һаны яҡынса 693 меңгә тиң була. XI быуатта йәшәгән фарсы ғалимы Гардизи ул ваҡытта болғарҙар 50 мең ғаиләнән торған, тип яҙа. Әгәр бер ғаиләлә уртаса 6 бала булыуын иҫәпләгәндә, уларҙың һаны яҡынса 300 мең кешегә тиң була. Артабан Оморҙаҡов Юлиандың яҙмаларындағы мәғлүмәт менән таныштыра. Болғарға һәм башҡорт ерҙәренә сәйәхәт ҡылған венгр монахы һәм сәйәхәтсеһе үҙ юлъяҙмаларында, Болғар 1236 йылда 500 мең кешелек ғәскәр туплай алған (тупларға мөмкинлеге булған), тип яҙа. Оморҙаҡов ошо фактарҙы сағыштырып, Урланис телгә алған 693 мең кешенең 300 мең болғарҙар, 200 меңе башҡорттар һәм ҡыпсаҡтар, ҡалғаны башҡа халыҡтар булған, тип яҙа.

Болғар йылъяҙмаларында ла VIII-XIV быуаттарҙа ошо ил сиктәрендә йәшәгән башҡорттар һәм бөрйәндәрҙең (бурджане) һаны, уларҙың ҡайҙан килеүе, ҡайҙа йәшәүҙәре, тормош кимәле хаҡында мәғлүмәт бар. Үкенескә күрә, был йылъяҙмалар бөгөнгө көнгәсә насар өйрәнелгән.

Ошо осорға ҡараған болғарҙарҙың Гари-Барадж йылъяҙмаһында 895 йылда Микаил исемле хандың Болғарҙағы халыҡ иҫәбен алыуы хаҡында телгә алына. Ул иҫәп алыу буйынса илдә 550 мең кеше йәшәүе асыҡлана. Шуларҙың 190 меңе болғарҙар, 180 меңе арҙар (фин-уғырҙар), 170 мене - моджарҙар йәки башҡорттар, 10 мене - бөрйәндәр һәм хондар була. Күрәһең, башҡорттар һәм бөрйәндәр исемлегенә һуңынан Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышына күсеп киткән үҫәргән, түңгәүер, бөрйән ырыуҙары ла индерелгәндәр. Был турала академик Кузеев: "Үҫәргәндәрҙең, түңгәүерҙәрҙең, шулай уҡ башҡа башҡорт ҡәбиләләренең ата-бабалары иртә Урта быуат осоронда баджгард, баджгурд, басжирт, йәки башхарт тигән дөйөм исем аҫтында билдәле булған. Бөрйәндәр иһә үҙ исеме аҫтында (бурджан, борджан) беҙҙең эраға тиклем I мең йылдан алып XIV быуатҡа тиклем Каспий буйынан алып Византияға тиклемге ерҙәрҙә йәшәгән ҡәбилә булараҡ, айырым телгә алына". Артабан академик: "Беҙҙең эраға тиклем II һәм I быуат сигендә баждгардтар һәм бурджандар Волга-Болгар донъяһының көньяҡ, көньяҡ-көнсығыш сиктәрендә йәшәгән. Һуңынан яйлап көнсығышҡа, Көньяҡ Урал тауҙары яғына күсенгән. Бөрйәндәр, үҫәргәндәр, түңгәүерҙәр (боронғо башҡорттар) Бөгөлмә ҡалҡыулығының үҙәк райондарында йәшәгән юрматы ҡәбиләләренең көньяҡ, һуңынан көнсығыш күршеләренә әйләнә. Бөрйәндәр, үҫәргәндәр, түңгәүерҙәр XI-XII быуатта Болғарҙың сиктәренә яҡын йәшәгән осорҙа болғарҙарҙан ислам динен ҡабул итә", - тип яҙа.

IX быуат сығанағы булған Болғар йылъяҙмаһына ярашлы, Урта быуат башҡорттарының Болғар составында йәшәгән бер өлөшө - үҫәргән, түңгәүер, бөрйән башҡорттарының һаны 180 меңгә тиң була һәм был ошо дәүләт халҡының өстән бер өлөшөн тәшкил итә. Был һанға Истахри яҙмаларындағы 200 меңде ҡушып, ошо осорҙағы башҡорттар яҡынса 380 мең булған, тип әйтә алабыҙ алыуға. Әммә был һан һуңғы аныҡлыҡ түгел. Башта әйтеп китеүебеҙсә, С. Мирасовтың, XIII-XIV быуаттарҙа, йәғни Алтын Урҙа осоро ваҡытында, башҡорттарҙың һаны ете миллионға тиң булған, ә Рус дәүләтенә ҡушылғанда 3 миллионға тиклем кәмегән, тигән раҫлауын бик тә яҡлағы, иҫбат итке килә. Ул нигеҙләнгән хеҙмәт, сығанаҡтар, бәлки, ниндәйҙер архивтарҙа яталыр әле...

Шулай итеп, башҡорттар Урта быуаттар дәүерендә Көнсығышта ла, Көнбайышта ла яҡшы билдәле, заманына күрә күп һанлы халыҡ була. Быуаттар үтеү менән уларҙың һаны төрлө тарихи ваҡиғалар сәбәпле даими рәүештә үҙгәрә, йә арта, йә кәмей. Бөгөнгө көндә уларҙың һаны 1,5 миллиондан ашыу тәшкил итә.

**Азамат АБУТАЛИПОВ яҙып алды.**

**(Аҙағы. Башы 34-се һанда).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

Балаларҙы сәңгелдәктә саҡта уҡ йәрәштереү йолаһы XIX быуат һуңына тиклем Урал арьяғы башҡорттарының байҙарында ғына һаҡлана. Никах килешеүе төҙөү билдәһе итеп кейәүҙең һәм кәләштең ата-әсәләре бата - бер һауыттан һыуға иҙелгән бал йәки ҡымыҙ эсә. Ошо мәлдән ҡыҙ кәләшкә әйләнә, ә инде атаһы уны икенсе кешегә кейәүгә бирә алмай. Әгәр ҡыҙҙың атаһы ҡыҙын йәрәшелгән егетенә бирергә теләмәй икән, ул ҡыҙын һатып алырға, йәғни егеткә һәм уның ата-әсәһенә алдан һөйләшелгән ҡалым хаҡын ҡайтарырға тейеш. XX быуат башында бала саҡтан уҡ йәрәшеү һирәгәйә. Башҡорттар бик иртә башлы-күҙле була. Егеттәр 15-16 йәшкә етеүгә, уны 13-14 йәшлек ҡыҙға өйләндерәләр. Атай кеше, улын өйләндерергә теләһә, ҡатыны менән кәңәшләшә һәм улының да ризалығын һорай. Ҡатыны менән кәңәшләшһә лә, киленде һәр саҡ атай һайлай. Улының һәм ҡатынының ризалығын алып, ул буласаҡ ҡайны кешегә ҡоҙалар ебәрә йәки һөйләшеү өсөн үҙе бара. Буласаҡ килендең ата-әсәһе риза булған осраҡта, ҡалым хаҡы килешелә. Уның күләме ата-әсәнең хәленән сығып билдәләнә. Урал арьяғы башҡорттарында ул йылҡынан, эре һәм ваҡ малдан, ике-өс күлдәктән, шаршауҙан, бер пар итектән, яулыҡтан йәки ҡашмауҙан, еләндән торған. Был мөлкәттең барыһы ла, йылҡынан башҡа, ҡыҙға тәғәйенләнә. Аттарҙың береһе ҡыҙҙың атаһына бирелә, икенсеһе туйға һуйыла. Ҡыҙҙың әсәһенә кейәү төлкө тиреһенән инә туны бүләк итә. Төньяҡ-көнсығыштағы урта хәлле башҡорттарҙа ҡалым 50-150 һум аҡсанан, бер аттан, ҡолонло бейәнән, быҙаулы ике һыйырҙан, ике-өс һарыҡтан һәм дөйөм хаҡы 15-20 һумлыҡ төрлө туҡымаларҙан торған. Ҡалым үҙгәреп торһа ла, уның күләме билдәле сиктән төшмәй: ҡайныға баш аты, ҡәйнәгә инә туны, таратыу аҡсаһына 10-15 һум, туйға һуйырға һыйыр йәки һарыҡ, кәләшкә күлдәклек һәм мәһәр. Ҡыҙҙың әсәһенә һәр ваҡытта ла төлкө тун бүләк ителмәй, ҡайһы бер ваҡытта ул һарыҡ туны йәки ябай елән дә булыуы мөмкин. Айырым урындарҙа был бүләк "һөт хаҡы" тип атала. Мотлаҡ булған бүләктәрҙән ҡалым ҡыҙҙың атаһына бирелә. Ул иһә ҡыҙ артынан мал, аҡса һ.б., бик йыш ҡалым хаҡынан күберәк күләмдә бирнә бирә. Бынан тыш, ошо милек әйәһе булған кәләшкә кейәү "кесе ҡалым" - шәл, яулыҡ, елән, күлдәк, итек һәм һандыҡ бүләк итә.

XIX быуатта башҡорттар үҙ ырыуынан һәм улысынан кәләш ала алмаған. Кәләште улар 100 саҡрымдан алыҫ ерҙәрҙән барып алған. Был ғөрөф-ғәҙәт XX быуат башында ла Урал алды һәм Урал арьяғы башҡорттарында һаҡлана. Шул уҡ ваҡытта, башҡорттарҙың бер өлөшө, көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш Башҡортостан башҡорттарынан башҡа, кәләште үҙ ырыуынан булһа - икенсе ауылдан, әгәр үҙ ауылынан икән, икенсе аранан, аймаҡтан алған.

Нисек кенә булмаһын, дүрт быуынға тиклем туғандар араһында никах рөхсәт ителмәгән. Никахҡа бишенсе һәм алтынсы быуын туғандар - тыуа ят һәм ете яттар ғына инә алған.

***✓ Төптән уйлаһаң, ата-әсәләр баланың белеме менән түгел, ә ниндәй баһа алыуы менән ҡыҙыҡһына. Әйтерһең дә, көндәлектәге йә журналдағы баһа баланың ысынбарлыҡтағы белеме менән тап килә.***



# БАЛА етди хаталарға

**Мәғариф системаһында эшләүемә 16 йылдан ашыу ваҡыт үтеп киткән. Ошо йылдарҙы, башҡарылған эштәрҙе анализлап ҡараһам, мәғариф системаһының идеялары, принциптары йыш ҡына ысынбарлыҡтағы тормош ҡиммәттәре менән тап килеп етмәүен күреп бошонам. Мәктәптә уҡыған 11 йыл эсендә беҙ уҡыусыларҙы тормошҡа яраҡлашҡан, үҙаллы фекерләй алған, илебеҙ өсөн кәрәкле шәхес итеп тәрбиәләргә тырышабыҙ, уларҙы яҡты киләсәккә инандырабыҙ. Әммә күп уҡыусылар ысынбарлыҡтағы тормош киңлегендә юғалып ҡала. Берәүҙәре мәңгелеккә "һаҙлыҡҡа" батһа, икенселәре хаталары аша яңынан йәшәргә өйрәнә. Шуға ла ҡайһы бер сығарылыш уҡыусыларынан шундай үпкә һүҙҙәрен ишетергә лә тура килә: "Һеҙ беҙгә белем бирҙегеҙ, дөрөҫ йәшәргә өйрәттегеҙ, ә нисек йәшәргә өйрәтмәнегеҙ". Ысынлап та шулай икән, мин быға үҙем саҡ төшөнә башланым, "Ә нисек йәшәргә кәрәк?" тигән һорауға, бәлки, әле лә дөрөҫ яуап бирә алмаҫмын. Иң үкенеслеһе шул: күптәр шуны аңламайынса китә бит был донъянан. Мин уҡытыусыларҙы ғына түгел, ә башҡа кешеләрҙе лә, мәҫәлән, ата-әсәләрҙе лә күҙ уңында тотам.**

## Ваҡиғаларҙы ашыҡтырабыҙ

Балаларының бәхетле, сәләмәт, белемле, уңған булыуын теләмәгән ата-әсә бик һирәк. Шуға ла улар балалар баҡсаһында уҡ балаларынан аҡыллы бала үҫтерергә тырыша. Ике әсә бер-береһе менән маһайышып гәп ҡора:

- Минең улым биш йәштә, уҡый ҙа, яҙа ла белә, бөгөндән мәктәпкә алып барып ултырт инде!

- Минең улым дүрт йәштә үк уҡырға, яҙырға өйрәндесе.

- Ә һинең улың нисә түңәрәккә йөрөй? Беҙ өсәүгә яҙылдыҡ. Ирем күп итеп китаптар алып ҡайтҡан, өйҙә шулар менән шөғөлләнәбеҙ...

Ҡайһы бер ата-әсәләр балалары менән бөтөнләй шөғөлләнмәгән, уларҙың киләсәген ҡайғыртмаған ваҡытта, мин был ата-әсәләргә "Афарин!" тип әйтер инем, әммә, халыҡ әйтмешләй, таяҡтың ике осо була. Балаларҙың фекерләү ҡеүәһен, логикаһын, физик һәләтен үҫтереүгә, хәтерен яҡшыртыуға ҡоролған күнекмәләр менән шөғөлләнеү, уйындар уйнау, түңәрәктәргә йөрөү кәрәк, тик сама менән. Ә бына яҙырға, уҡырға өйрәтергә ярамай. Ни өсөн? Сөнки бала беренсе класҡа ҙур ҡыҙыҡһыныу менән, ниндәйҙер яңылыҡ алырға килә. Уҡый-яҙа белгән баланың яйлап ҡыҙыҡһыныуы юғала һәм ул үҫештән туҡтап, мәктәпкә шаярыу, уйнау өсөн генә килә башлай. Үҫә бара уның уҡыуға, белем алыуға теләге бөтөнләй юғала.

Үҙемдең йәшлек хаталары менән уртаҡлашып киткем килә. Беҙ тормош иптәшем менән ике ҡыҙ тәрбиәләйбеҙ. Тәүге хатабыҙ нимәлә булды: оло ҡыҙыбыҙҙы төрлө яҡлап үҫешкән бала итеп күргебеҙ килде. Мәктәпкә йәше еткәс, үҙем эшләгән гимназияға уҡырға алып килдем. Гимназияның беренсе класына уҡырға инер өсөн тест үтергә кәрәк. Бер йыл буйына ҡыҙыбыҙҙы ошо тест программаһына әҙерләнек: алфавит ятлатабыҙ, һанарға, яҙырға өйрәтәбеҙ һәм башҡалар. Бала тырыша, ләкин нимәлер килеп сыҡмай, әйҙә әрләп киренән өйрәтә башлайбыҙ. Ҡыҙыбыҙ өйрәнде, әммә ҡыҙыҡһынып, теләк менән түгел - беҙ ҡушҡанға йәки теләгәнгә генә. Беренсе класта уҡығанда шашка түңәрәгенә алып килдем - ул теләгәнгә түгел, ә мин шулай яҡшыраҡ булыр, баланың уйлау, күреү һәләте, аңы үҫешер, тип уйлағанға. Шашка түңәрәгенә биреү яҡшы йәки насар булды, тип әйтә алмайым, сөнки уның ыңғай һәм кире яҡтары ла етерлек, һәр нәмәнең үҙ самаһы була. Төп хата шунда: мин балала тәүҙә ҡыҙыҡһыныу тойғоһо (мотивация) булдырырға тейеш инем.

Икенсе ҡыҙыбыҙҙы мәктәпкә бер йыл алдан бирҙек. Беренсе класҡа килгәндә ул яҙа ла, уҡый ҙа белмәй ине. Класында шундай берҙән-бер уҡыусы булды. Башланғыс кластар уҡытыусыһы осраған һайын миңә ҡыҙыбыҙ менән шөғөлләнергә кәрәклекте һыҙыҡ өҫтөнә алды. Беҙҙең ваҡыт юҡ. Ярты йыл үткәс, ҡышҡы каникулдар ваҡытында, ҡыҙыбыҙҙың ҡурсаҡтарын, уйынсыҡтарын теҙеп ултыртып, уларға китап уҡығанына шаһит булдыҡ. Нимәлер менән мәшғүл булғас, беҙ уға артыҡ иғтибар итмәйбеҙ, үҙ алдына һөйләнәлер, тип уйлайбыҙ. Каникулдар тамамланып, уҡырға барғас, уҡытыусыһы аптырап һорай: "Һеҙ шулай тиҙ генә ҡыҙығыҙҙы нисек уҡырға, яҙырға өйрәттегеҙ ул?" Каникул ваҡытында ул, ысынлап та, ҡурсаҡтарына китап уҡып ултырған булып сыҡты. Беренсе класты тамамлаған саҡта беҙҙең ҡыҙыбыҙ класында башҡорт һәм урыҫ теленән тиҙлеккә иң күп һүҙ уҡый ине. Шулай уҡ беренсе класта уҡығанда, үҙебеҙ эштә булғас, уны оҙайтылған көн төркөмөнә йөрөтөргә уйланыҡ, әммә ҡыҙыбыҙҙың бер ҙә унда ҡалырға уйы юҡ. Апаһы шашка түңәрәгенә йөрөгәс, уның менән эйәртеп ебәрәбеҙ. Шулай ул да шашка менән шөғөлләнә башланы. Бер нисә айҙан шашка буйынса Башҡортостан беренселегеүтте. Апаһы был ярышта өсөнсө урын алып, грамота һәм миҙал менән бүләкләнде. Икенсе ҡыҙыбыҙ урынһыҙ ҡалды. Өйгә ҡайтҡас: "Минең дә грамота менән миҙал алғым килә", - тип ярһып илай. "Бына шашка менән нығыраҡ шөғөлләнһәң, һин дә миҙал алырһың", тип йыуатабыҙ. Ошонан башлап, уның бер генә ярыштан да урынһыҙ, миҙалһыҙ ҡайтҡаны булманы. Ҡайһы саҡта түбәнерәк урын алһа, ғәрләнә башлай. Миңә оят, мин еңергә тейешмен, барыбер еңәсәкмен, тип тағы ла нығыраҡ шөғөлләнә. Шуға ла ул апаһына ҡарағанда тиҙерәк уңыштарға өлгәште: шашка буйынса күп тапҡырҙар Башҡортостан, Рәсәй, ике тапҡыр Европа һәм Донъя чемпионы титулдарын яуланы. Унның һәр ваҡытта ла уҡыуға, шашка менән шөғөлләнеүгә ҡыҙыҡһыныуы кәме-мәне, сөнки беҙ өҫтән көсләп таҡманыҡ, ә дәртләндереп кенә торҙоҡ. Оло ҡыҙыбыҙҙы һәр саҡ контролдә тотоу, нимәлер килеп сыҡмаһа - әрләү унның үҙенә булған ышанысын кәметте, күңелендә ҡурҡыу тойғоһо уянды.



**Ата-әсәләрҙең төп хатаһы шунда, улар тиҙерәк үҙ балаларын бөйөк кеше итеп күргеләре килә. Ләкин был берҙән-бер хата түгел, унның икенселәре, тағы ла үкенеслерәктәре бар.**

## Ата-әсәне баһа ғына ҡыҙыҡтыра

Дәрес тамамланыр-тамамланмаҫтан, уҡыусылар көндәлектәрен тотоп, эргәгә йүгереп килеп етәләр ҙә баһа ҡуйыуымды үтенәләр, әгәр ул баһа "4"-ле йәки "5"-ле булһа инде. Дәрес ваҡытында яуап бирһәләр, шунда уҡ үҙҙәренең ниндәй билдә алыуын һорай башлайҙар. "3"-лө тиһәң, ауыҙҙарын бәлшәйтеп: "Ә ниңә?" - тип һорайҙар, "Улай булғас, ярай, "5" ҡуйырмын", - тиһәм, ауыҙҙары йырылып китә. Шунда класҡа һорау бирәм: "Һеҙ мәктәпкә ни өсөн йөрөйһөгөҙ?" Бөтәһе лә бер тауыштан: "Уҡырға, белем алырға!"- тип ҡысҡырып яуап бирәләр. "Ә баһа һиңә нимәгә кәрәк?"- тип һораһаң, әсәйем көндәлекте тикшерә йә әсәйемә күрһәтәм, тип яуаплайҙар.

Төптән уйлаһаң, ата-әсәләр баланың белеме менән түгел, ә ниндәй баһа алыуы менән ҡыҙыҡһына. Әйтерһең дә, көндәлектәге йә журналдағы баһа баланың ысынбарлыҡтағы белеме менән тап килә. Уҡытыусыларҙың уҡыусыларҙың белем кимәлен баһалаған билдәләр - ул шкала ғына. Баланың уҡыуға ҡыҙыҡһыныуын арттырыусы (мотивация булдырыусы) шкала. Үкенескә күрә, беҙгә белем, уҡыуҙың сифаты кәрәкмәй, ә ошо шкала кәрәк. Ошо шкалаға ҡарап, ниндәйҙер уҡыу сифаты тураһында һүҙ йөрөтәләр.

Былтырғы уҡыу йылында беҙҙең гимназияға икенсе бер районан бер ҡыҙ бала уҡырға килде. Уҡыу кимәле уртаса. Күренеп тора: баланың ҡыҙыҡһыныу тойғоһо бар, ул өйрәнергә әҙер, әммә белем нигеҙе әлегә түбәнерәк. Уҡыу йылының беренсе сирегетамамланғас, әсәһе уны кире алып ҡайтып киткән. Ни өсөн? "Мин баламды "3"-лөгә уҡытырға алып килмәнем", - тип әйткән әсә, сөнки унның бер фәндән "3"-лө билдәһе сыҡҡан. Тимәк, әсә кешегә балаһының белеме түгел, ә ниндәй билдә алыуы мөһимерәк. Аҙаҡ, 11-се класты тамамлағанда БДИ һөҙөмтәләре түбән булһа, "Ә ниңә улай булды һуң, ул бит яҡшы уҡыны?" тип баштарын тотоп аптырайҙар.

**Был ата-әсәләрҙең икенсе хатаһы. Шуға ла балаларҙың көндәлектәге, журналдағы баһаларына ҡарап ҡына унның уҡыуы тураһында тулы фекер йөрөтөргә ярамай. Нимәлер килеп сыҡмай икән, психологтар, тәжрибәле уҡытыусылар менән кәңәшләшеп, баланы нисек үҫтереү юлдарын эҙләп табырға кәрәк. Был эште ни тиклем иртәрәк башлайһың, шул тиклем яҡшыраҡ буласаҡ.**

***Уҡыусыларҙың бик аҙы ғына үҙҙәренең ниндәй һөнәр һайлауҙары һәм ни өсөн ошо һөнәр кешеһе булырға теләүҙәре тураһында һөйләп бирә ала. Ҡайһы берәүҙәр хатта 11-се класта бер профилдән икенсеһенә күсеп, һайлаған һөнәрҙәрен алмаштыра башлай. Шундай уҡ һорауҙы 5-се һәм 7-8-се класс уҡыусыларына бирҙем. 7-8-селәр араһында бер нисә уҡыусы ғына киләсәктә үҙенең кем булырын әйтеп бирҙе, ҡалғандары яурын һелкетте. Ә бына 5-селәрҙең фантазияһы киңерәк булып сыҡты: программист, табип, конструктор, уҡытыусы, тәрбиәсе һәм башҡалар. Аҙаҡ белешеүенсә, уларҙың ата-әсәләре шул һөнәр эйәләре икән, йә дуҫтары шул һөнәрҙе һайлаған. Тимәк, шундай һығымта яһарға тура килә: күп уҡыусылар ҙурая килә үҙҙәрен бик тә аҡыллыға һанап, балалыҡ фекерҙәрен, теләктәрен алмаштыра башлай, тотороҡлоҡ юғала. Бында, әлбиттә, мәктәптең һәм ата-әсәләрҙең ғәйебе лә ҙур. Профессия тураһында һөйләшеүҙәр бик һуңлап, юғары кластарҙа ғына башлана.***

## Ҡурҡыу тойғоһо көслө

Киләһе хата алдағы билдәләп үткән хаталар һөҙөмтәһендә килеп сыға. Ниңәлер күп кенә балалар дәрес ваҡытында оялып, ҡыйыуһыҙ ғына яуап бирәләр йәки бөтөнләй ҡатнашмайҙар, һораһың да яуап бирмәйҙәр, ә бит улар бе-

лемһеҙ, фекер йөрөтә белмәгән бала түгел. Класҡа һорау бирһәң, башта, әйләнеп, бер-берееңә ҡарайҙар. Ә нинә шулай килеп сыға? Мин быны уҡыусыларҙың үҙҙәренән һораным. Улар былай тип яуап бирҙе:

- Мин оялам;
- Белмәйем;
- Башҡалар ҡул күтәрмәй бит;
- Дөрөҫ яуап бирмәсмен һәм "2"-ле алырмын, тип ҡурҡам.

Һуңғы яуап күберәк яңғыраны. Тимәк, балаларҙа ҡурҡыу, үҙенең көсөнә, белеменә ышанып етмәү тойғоһо көслө. Ә ул тойғо ҡайҙан килә? Әлбиттә, беҙҙән, ололарҙан. Бер яҡтан - "ҡулына ҡамсы тотҡан" ата-әсәләр, икенсе яҡтан - һәр көн уҡыу талап иткән, "2"-ле менән ҡурҡытҡан уҡытыусылар. Һине йүгереп килеп ҡосаҡлаған, үҙҙәренең эс серҙәрен рәхәтләнеп һөйләгән беренсе класс уҡыусыһы менән үҙ-үҙҙәренә йомолған, нимәндер һәр саҡ ҡурҡҡан, урыны менән тупаҫлығын

Ата-әсәләрҙән шундай һорау ишетергә тура килгәне бар: "Минең балам мәктәп данын арттырып йөрөй, ә конкурстарға барғанда, юлға аҡса ла түләмәйҙәр" йәки "Минең балама кәрәкме ни ул, ана, уҡытыусыға кәрәк, әйҙә, ул түләһен" һ.б. Ҡайһы саҡта аптырап ҡуяһың беҙҙән ата-әсәләргә. Уҡытыусылар (уларҙың да бит өйҙәрендә ғаиләһе көтөп тора) кискә тиклем ҡалып, уларҙың балалары менән шөғөлләнә, бушҡа белем бирә, ә улар барыбер ҡәнәғәт түгел. Шундай мәҡәл бар: "Эшләгәнең кеше өсөн булһа ла, өйрәнгәнең үҙең өсөн". Был мәҡәлде икенсерәк итеп әйтер инем: "Уҡыуың мәктәп өсөн булһа ла, белемең үҙең өсөн". Быны яҡшы аңлаған ата-әсәләр ҙә бар, әлбиттә. Улар менән аралашыу беҙҙең дә күңелде үҫтерә.

**Ата-әсә - ул инвестор, балаһының төрлә яҡлап үҫеүен инвестициялай, аҙаҡ үҙе лә бәхетле, етеш ҡартлыҡта йәшәү өсөн.**

дә тырышып белем алыуҙы, фән тауына үрләргә кәрәклекте онотоп ебәрәләр. Шуға ла уҡыусыларҙың күпселеге мәктәп йылдарын парта артында тыныс ҡына ултырып үткәрә: арлы-бирле төрлө сараларҙа ҡатнашалар, бер нисә тапҡыр конкурстарҙа сығыш яһайҙар. Дөйөм алғанда, иҫтә ҡалдырлыҡ бер нәмә лә юҡ. Уларҙың башында бер генә уй: нисек тә 11-ҙе тамамлармын, атай-әсәйем берәй нисек уҡырға индерер әле.

11-се класҡа еткән уҡыусыларҙың ҡайһы берҙәре ниндәй һөнәр һайлауҙарын, ҡайҙа уҡырға инергә, киләсәктә кем булырға теләүҙәрен дә ул тиклем күҙ алдына килтермәй. Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырам да, шунан ҡарармын әле, тип яуаплайҙар. Шундайраҡ яуаптарҙы ишетергә тура килә:

- Әллә, белмәйем;
- Берҙәм дәүләт имтиханларын тапшырғас ҡарармын;
- Уйларға ваҡыт бар әле.

Аҙаҡ беленеүенсә, уларҙың ата-әсәләре шул һөнәр эйәләре икән, йә дуҫтары шул һөнәрҙе һайлаған. Тимәк, шундай һығымта яһарға тура килә: күп уҡыусылар ҙурая килә үҙҙәрен бик тә аҡыллыға һанап, балалыҡ фекерҙәрен, теләктәрен алмаштыра башлай, тотороҡлоҡ юғала. Бында, әлбиттә, мәктәптең һәм ата-әсәләрҙең ғәйебе лә ҙур. Профессия тураһында һөйләшеүҙәр бик һүлпән, юғары кластарҙа ғына башлана. Баҙар иҡтисады шарттарында илебеҙгә ниндәй һөнәр кешеләре талап ителеүе тураһындағы һөйләшеүҙе 7-се кластан да һуңламай башларға кәрәк. Ата-әсәләр балаларына "Һин киләсәктә кем булырға хыялланаһың?" тигән һорауҙы йыш бирәләрме икән? Урта класс уҡыусыларының 80 проценты "Юҡ!" тип яуап бирҙе. Тик 20 процент ата-әсәләр генә балаларына ниндәйҙер һөнәр һайларға кәңәш бирә. Балаларҙың йыл да төрлө түңәрәктәрҙә алмаштырыуы быға асыҡ миҫал

гәндәй, мин мәктәпте тамамлағанда геолог булырға хыяллана инем. Математика уҡытыусыһы Абдрахманов Салауат Гәрәй улы мине Стәрлетамаҡ педагогия институтына уҡырға барырға өгөтләне, әммә минең уҡытыусы булырға теләк юҡ ине. Шулай булһа ла, Башҡорт дәүләт университетының "Башҡорт филологияһы һәм журналистика" факультетына уҡырға инергә насип булды. Бишенсе курсты тамамлағанда факультет деканы Ҡунафин Ғиниәт Сәфиулла улы мине университетта уҡытырға ҡалырға тәҡдим итте. Уҡытыусы булғым килмәй, тип ризалашманым. Яҙмыш үҙе мәктәпкә алып килде.

Яңыраҡ бер ваҡиға ҡылт итеп иҫкә төштө. 4-се класта уҡығанда уҡытыусыһы беҙҙән "Киләсәктә кем булырға хыялланаһығыҙ?" тигән темаға инша яҙҙыртты. "Мин киләсәктә уҡытыусы буласаҡмын, сөнки минең өләсәйем уҡытыусы булған", - тип яҙып биргәйнем. Бәлки, бала саҡта теләгән

# ТӘРБИӘЛӘГӘНДӘ...

юл ҡуябыҙ

күрһәткән ун беренсе класс уҡыусыларын сағыштырып ҡарағыҙ. Был беҙҙең, ололарҙың, тәрбиә емеше. Етмәһә, беҙҙең илдә шундай әйтемде ҡабатларға яраталар, ҡурҡа - тимәк, хөрмәт итә.

**Ысынлап та, ҡурҡыу тойғоһо бик көслө. Мин шундай миҫал килтерәм: һеҙ күп тапҡырҙар йығылып, аяҡ-ҡулдарҙы һыҙырып, велосипедты ватып, шунан ғына унда йөрөргә өйрәндегеҙ, сөнки теләгегеҙ ҙур ине һәм ҡурҡыу тойғоһо булманы. Ә әле нимәнән ҡурҡабыҙ, аяҡ-ҡулдар һыҙырылмай, бер нәмә лә емерелмәй бит. Эйе, хаталанырбыҙ, әммә хаталар ғына беҙҙе белем алырға, дөрөҫ йәшәргә өйрәтә.**

## Уҡыуың мәктәп өсөн, белемең үҙең өсөн

Төрлө кимәлдә үткән олимпиадаларҙа, ғилми-эҙләнеү эштәрендә лә бер үк уҡыусылар ҡатнаша. Күптәрҙе көсләп тә ҡатнаштырып булмай. Әйтерһең, ул уҡытыусыға ғына кәрәк. Ҡайһылары инәлтергә ярата. Уҡыусылар олимпиада менән ғилми-тикшеренеү эштәренең ни тиклем кәрәклеген, ни тиклем ҙур әһәмиәткә эйә булыуын баштарына ла индереп сығармай. Был ике ғәмәл һине үҙ аллы белем алырға, эҙләнергә, һөйләргә, уйларға өйрәтә, зиһенеңде, талапсанлығыңды арттыра, башҡаларҙан бер башҡа өҫтөн ҡуя.

## Ваҡытында төҙәтәйек!

Мин үрҙә балалар тәрбиәләгәндә ебәрелгән ҡайһы бер хаталарҙы телгә алып үттем, ә һанай китһәң, улар иҫ китмәле күп, әйтәйек, артыҡ иркәләү, бала нимә һораһа, шуны алырға тырышыу, яҡшы баһа өсөн бүләкләү һәм башҡалар. Тағы ла бер, минеңсә, ҙур хатаны күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай: беҙ балалар менән һөйләшмәйбеҙ. Һөйләшмәйбеҙ, тигәндә, мәктәптә нисек уҡының, ниндәй баһалар алдың, тигәндәрҙе иҫәпкә алмайым. "Балам, һин бөгөн нимә белдең, уҡытыусы һине нимәгә өйрәтте, ниндәй фән һине ҡыҙыҡһындыра?" йәки "Балам, ә һинең кем булғың килә, һин нисегерәк йәшәргә теләйһең?" кеүегерәк темаларға һөйләшкәнегеҙ бармы?

Мәктәптә уҡыған йылдарында балалар киләсәкте яҡты бер мираж һымаҡ ҡабул итә. Әйтерһең, 11 йыллыҡ "туннелдең" теге осонда уларҙы бәхет үҙе ҡолас йәйеп көтөп тора. Уҡыусылар реаль тормошто күҙ алдына баҫтырырға теләмәй, бөгөнгө көн менән генә йәшәй. "Әле мәктәптә уҡыйым, атай-әсәй ашата, кейендерә, аҙаҡ юғары уҡыу йортона уҡырға инәм, яҡшы һөнәр алам, шунан аҡсалы эшкә урынлашып, күп аҡса эшләйем дә фатир, машина һатып алам..." тип еңел генә уйлап, хыялланып йөрөй улар. Ә бына ошо хыялдарҙың барыһына ла өлгәшер өсөн көн

Уҡыусыларҙың бик аҙы ғына үҙҙәренең ниндәй һөнәр һайлауҙары һәм ни өсөн ошо һөнәр кешеһе булырға теләүҙәре тураһында һөйләп бирә ала. Ҡайһы берәүҙәр хатта 11-се класта бер профилдән икенсеһенә күсеп, һайлаған һөнәрҙәрен алмаштыра башлай. Шундай уҡ һорауҙы 5-се һәм 7-8-се класс уҡыусыларына бирҙем. 7-8-селәр араһында бер нисә уҡыусы ғына киләсәктә үҙенең кем булырын әйтеп бирҙе, ҡалғандары яурын һелкетте. Ә бына 5-селәрҙең фантазияһы киңерәк булып сыҡты: программист, табип, конструктор, уҡытыусы, тәрбиәсе һәм башҡалар.

булып тора. Ололарға барыбер, иң мөһиме, балалары урам буйлап йөрөгәнсе, ҡайҙалыр шөғөлләнһен. Ә бәләкәйҙән уларға дөрөҫ йүнәлеш бирергә, характерҙарын сыныҡтырырға, рух көсөн тәрбиәләргә онотабыҙ. Шуғалыр ҙа юғары уҡыу йортон тамамлаған талиптарҙың 70 проценты уҡып сыҡҡан һөнәрҙәре буйынса эшләмәй.

## Үҙем иһә...

Үҙебеҙгә килгәндә, оло ҡыҙым техник уҡыу йортон һайланы, Өфө нефть техник университетында геолог һөнәрен үҙләштерә. Үҙе һайланы, беҙ көсләп таҡманыҡ. Геолог, ти-

теләгем мине ғүмер буйы үҙе артынан йөрөтәләр, кем белә. Шуға балаларҙың күңелендә бәләкәй генә хыялдарға ла урын ҡалдырырға кәрәк.

**Дөйөм алғанда, шуны әйтке килә: беҙ был донъяла күп хаталар ебәрәбеҙ, аҙаҡ төҙәтәбеҙ, тик ҡайһы бер хаталарҙы төҙәтеүҙә бик һуңлап китмәһен ине, бигерәк тә балаларға ҡағылғанын.**

**Рифат ӘЙҮПОВ,**
**Ишембайҙағы Ә. Вәлиди исемендәге 2-се башҡорт гимназия-интернатының башҡорт теле уҡытыусыһы.**

*БАЛАҢА УҠЫ!*

# БАТЫР УЛДАР

Кешеләрҙе талап йөрөгән юлбаҫарҙар ҡулына бер ярлы ғына ҡарт барып эләгә. Юлбаҫарҙар башлығы уға былай ти: "Әгәр ҙә ҡолдар баҙарында һатылыуыңды теләмәһәң, йөҙ алтын табып түлә, һәм беҙ һине ирекккә ебәрәбеҙ". Бахыр ҡарт, аҡса өмөт итеп түгел, ә үҙе хаҡында белгертеү өсөн яҡындарына хат яҙа. Ҡарттың улы бик изгелекле һәм ҡыйыу була. Ул атаһының хатын алыу менән уның янына йүнәлә.

- Әфәнделәр, - ти ул юлбаҫарҙарға, - мин һеҙҙән атайымды түләүһеҙ ебәреүегеҙҙе үтенмәйем. Мин беләм: һеҙ быны эшләмәйәсәкһегеҙ. Атайым бик ҡарт һәм хәлһеҙ генә. Һеҙ уны ҡоллоҡҡа һата ла алмаҫһығыҙ. Һеҙ уны ебәрегеҙ ҙә, ҡоллоҡҡа мине һатығыҙ, аҡса ла эшләрһегеҙ".

Юлбаҫарҙарҙың башлығы үҙ ҡолаҡтарына үҙе ышанмай тора хатта.

- Ҡара әле, шундай улдар ҙа бар икән донъяла! - тип һоҡланыу белдерә ул. - Беҙҙә лә кешелеклелек үлеп бөтмәгән. Мин һинә атайыңды бүләк итәм, ана бара юлығыҙ...

Атай һәм ул шатланып өйҙәренә ҡайтып китә. Был хикәйәт Бәйғәмбәребеҙҙең шул хәҙисен иҫкә төшөрә: "Һәр бала үҙ атаһы алдында мәңге түләп бөтмәҫлек бурыслы. Әгәр ҙә ул атаһын ҡол булған сағында табып, уны һатып алып, ҡоллоҡтан ҡотҡарһа, шул рәүешле үҙенең бурысын үтәгән булыр".

# КӘЗӘЛӘР

Атаһы Нәжипкә бәләкәй генә кәзә бәрәсе бүләк итә. Нәжип йәй буйы шул бәрәсте тәрбиәләй, уныһы малай артынан ҡалмай, йүгергеләп йөрөй, тояҡтары менән сапсый.

Атаһы Нәжипте гел иҫкәртеп тора: "Бәрәсең өйгә инә күрмәһен, юҡһа, тояҡтары менән сапсып, ниҙелер зарарлауы мөмкин", - ти ул. Бер саҡ Нәжип туп алырға тип өйгә инә һәм артынан ишекте ябырға онота. Кәзә бәрәсе уның артынан килеп инә лә, туп-тура ҡаршыһында торған көҙгөгә йүнәлә. Көҙгөлә үҙе кеүек үк кәзә бәрәсен күргәс, уға ташлана. Көҙгө селпәрәмә килә.

"Атаң һүҙен тыңла", тигән Мөхәммәт бәйғәмбәр. Нәжип атаһының һүҙен ҡолағына элмәгәс, шулай эш боҙған.

**✓ Был ҡатын-ҡыҙ нисек түҙә икән, йоҡоң - йоҡо түгел, арыуҙың сигенә сығаһың. Йонсота, көноҙон күҙ йомола яҙып йөрөйһөң. Бер нәмә белмәй, төнө буйы уянмай йоҡлаған саҡтарына ышанмай ҙа хатта Сәмерхан.**




– Йәнбикә, Йәнбикә, ни булды?- тип асырғаланып ҡысҡырып ебәрҙе. Тауышҡа сабый уянып, иларға тотондо. Ир ике ҡуллап ҡатынын үҙенә әйләндерҙе. Күҙҙәре асыҡ ине Йәнбикәнең. Уларҙа әйтеп аңлата алмаҫлыҡ әрнеү һәм һыҙланыу күреп, Сәмерхан тетрәнде. Гүр һалҡыны кергән кәүҙәнән сирҡанғандай, йәһәт кенә улын ҡулына күтәрҙе. - Сеү, улым, илама, әсәйең... - Үҙе, күҙенә эркелгән йәшен йотоп, тышҡа йүгереп сыҡты.

- Инәй, инәй, Йәнбикә киленең үлеп киткән бит! - Йән өҙгөс был хәбәрҙән ҡарсыҡ саҡ һушынан яҙманы.

- Гонаһ шомлоғо, бынау кәкүкте әйтәм, килә лә ошонда күкелдәй, килә лә ошонда күкелдәй. Башҡа ер бөткәндер уға. Юҡҡа түгелдер, үҙемдең вафатымалыр тигәйнем... Ни өсөн ул йәш киленгә... - Әбей илайһыҡтай һөйләнеп, күрше-тирәгә хәбәр итергә йүгергеләне.

Шулай көтмәгәндә китеп барҙы унһ Йәнбикәһе. Һигеҙ йәшлек ҡыҙын, өс айы яңы тулып уҙған улын, утыҙ бише менән генә барған ирен ҡалдырып, мәңгелек йортона күсте. Сабыйҙан һуң мандый алманы шул, тип уйланы аҙаҡ Сәмерхан. Ә ҡатынының үлеменә тиклем ул хаҡта ике ятып бер төшөнә лә инмәне. Юғиһә, гел һөйләнеп йөрөнө лә баһа мәрхүмә.

- Бөйөрҙәрем ауырта, роддомда даулағайнылар ҙа ул, берәр айҙан тағы ятып нығынып алырға ҡуштылар. Әллә барайыммы ? - тигәйне.

- Эй, һинең ауырыуың бөтмәҫ. Сөскөрһәң дә балнис, йүткерһәң дә балнис. Әллә ниндәй сырхау бисәгә тап булынды, - тип көлкөгә һабыштырҙы ла ҡуйҙы шул. Дөрөҫөрәге, Сәмерхан ҡатынынан айырылғыһы килмәне. Йөклө сағында бик ауыр, ыҙаланып йөрөнө, бер нисә рәт дауаханала ятты. Бәпәйләгәс тә тиҙ генә сығарманылар. Бүтән бисәләр аҙна үтер-үтмәҫтән ҡайтып килә, ә был айға яҡын балнис койкаһында аунаны.

Инде баланың ҡырҡы тулып, һин дә мин әҙәмсә йәшәй башлағас ҡына тағы ебәргеһе килмәне. Йәш саҡ - дәртле саҡ, кәләшенең һутлы ирендәре, йәш, тығыҙ тәне бик танһыҡ ине әле. Ыңһарлай-ыңһарлай йөрөнө лә, ҡабатлап дауахана тип ауыҙ асманы Йәнбикә. Ҡарап тороуға бынамын тигән үҙе: төҫ тиһәң - төҫө, бәпәйҙән һуң тулыланыбыраҡ киткән кәүҙәһе, балаларса ихлас, алсаҡ ҡарашы... Кем уйлаған шулай кинәт кенә көнө бөтөрөн...

Төндә сабыйын имеҙеп ятҡан еренән иренә тауыш итте:

- Сәмерхан, эҫе генә сәй яһап бир сәле.

Тәмле йоҡоһон бүлдергәнгә унһының шул ҡәҙәр асыуы килде:

- Көнө буйы йомошауың етмәгән, инде төн ҡалдымы? Хәҙер ете төн уртаһында һиңә сәй ҡайнатып йөрөрмөн, - тип бурылданы.

- Улайһа, һыу ғына бир, тамағым кипте.

- Таптың ялсыны, - тине Сәмерхан әсенеп, - һин бәпәй ҡосаҡлап ят, ә мин һиңә һыу ташырға тейеш.

Ярай әле шул саҡ боролоп ятмаған, бүлмәһенән сығып, сүмес тултырып һыу килтерҙе. Йәнбикәһе башын ҡалҡытып, бер-ике йотом ғына уртланы ла, әллә нисек йәлләнес итеп ҡарап:

- Рәхмәт, өҫтәлгә ҡуй, кәрәкһә, ынтылып алырмын, һине борсоп тормам, - тине. Карауат башындағы стенала элеүле төнгө лампаның һүрән яҡтыһында йөҙҙәре ап-аҡ булып күренгән ҡатыны менән улына күҙ ташлағас, Сәмерхан, эйелеп, сабыйҙың маңлайынан үпте лә, үҙ яғына сыҡты. Бала мыжып йоҡо бирмәгәс, ошо бүлмәлә айырым ята башлағайны Йәнбикә. Бәлки, төн йоҡоһо бирмәйһегеҙ, тип һөйләнгән иренән дә ҡасҡандыр, бахыр. Тамсы һыу ҙа бирә алмаһа, ғүмерлеккә ҡалыр ине үкенесе. Хәйер, хәҙер ҙә үкенә лә бит, мәлендә дауаланһа, һауығып та китер ине кәләше. Бөйөрҙәре эшләүҙән туҡтаған, тинеләр. Йөрәктән үлеүҙәре билдәле, бөйөрҙән дә әҙәм үлә икән, тип аптыраны Сәмерхан.

Ни өсөн кеше яҡынының ҡәҙерен юғалтҡас ҡына аңлай һуң?

Шаңҡыған балыҡ хәлендә йөрөп, мәрхүмәнең өсөн, етеһен уҡытып, туған-тыумаса, күрше-күлән ҡайнап торғанға ғына беленмәгән, көндөң ҡайһылай үткәне лә һиҙелмәгән. Бала ҡулдан-ҡулға тапшырылды, барлығы ла тойолманы. Аят уҡытылып, һәммәһе таралғас башланды ла инде донъяның ыҙаһы.

Сәмерхандың әсәһе баланы бағыуҙан баш тартты.

- Килеп ҡараштырып, ашатып йөрөрмөн, әммә үҙемә ала алмайым. Үҙ хәлем үҙемә саҡ, - тине.

Ә Йәнбикәнең икенсе районда йәшәгән әсәһе ысынлап та үҙе кеше көнлө, хәжәтенән башҡа тышҡа ла сыға алмай ине.

Әҙәм ниндәй генә кәңәш бирмәһен, Сәмерхан балаларын хөкүмәт йортона тапшырыу хаҡында уйламаны ла. Медпункттан сабый өсөн аҙығын биреп торалар, ҡыҙы ҡул араһына инә башланы, көнө буйы ҡустыһын ҡарай. Тик төндә генә мәшәҡәт. Тороп һыу ҡайнатаһы, һөт йылытаһы, сабыйҙың аҫтын алыштыраһы бар. Был ҡатын-ҡыҙ нисек түҙә икән, йоҡоң - йоҡо түгел, арыуҙың сигенә сығаһың. Йонсота, көноҙон күҙ йомола яҙып йөрөйһөң. Бер нәмә белмәй, төнө буйы уянмай йоҡлаған саҡтарына ышанмай ҙа хатта Сәмерхан. Арыуы күңел яңғыҙлығына, Йәнбикәһен юҡһыныуға ҡушылып, йәнен әрнетә, йөрәген һыҙлата...

Келтерҙәп кенә барған тормош арбаһы, Йәнбикәнең вафатынан һуң, ҡапыл кирегә тәгәрәп киткәндәй булды. Бәлә яңғыҙ йөрөмәй, тиҙәр. Тәүҙә ҡайныһы, күп тә үтмәй ҡәйнәһе үлеп китте. Өлкән кешеләр ине улар, кем әйтмешләй, ашарын ашаған, йәшәрен йәшәгән. Ғаиләлә кесе ҡыҙ ине Йәнбикә. Әллә кинйәкәүҙәренең үлемен шулай ауыр кисерҙеләрме, бер-бер артлы фани донъянан китеп барҙылар. Бәхетле ата-әсәнең һөйөклө ҡыҙы Йәнбикә... Тәүге балалары тыуа тора, үлә тора. Алты-ете баланы һаҡлап ҡала алмағас, өмөтөн өҙгән ир менән ҡатын алыҫта йәшәгән күрәҙәсегә юл тота. Теге уларҙың аһзарын тыңлағас, оҙаҡ итеп доға ҡыла, бетеү тегеп бирә һәм, сабыйҙары тыуһа, хикмәтле исемдәр ҡушырға бойора. Йыл үтә, улдары Ғоморҙаҡ, ҡыҙҙары Үлмәҫбикә менән Йәнбикә тыуа. Сабыйым тере ҡалһа, бер ауыҙ ауыр һүҙ әйтмәҫ инем, тип теләгән ата-әсә балаларын өф итеп кенә үҫтерә. Ғоморҙаҡтары институтта инженер һөнәре алып, Себергә эшкә ебәрелде. Онотҡанда бер ҡайтып күренә. Хәйер, танһыҡ күстәнәстәр килеп тора тороуын. Үлмәҫбикә эргәлә генә, Мәләүездә кейәүҙә, бухгалтер. Төпсөктәре Йәнбикә бәләкәйҙән йыр-бейеүгә маһир, Стәрлелә мәҙәниәт техникумын тамамлап, ошо Ҡайынлыға тәғәйенләнде лә, тормошҡа сығып, төпләнеп тә ҡуйҙы.

Үлмәҫбикә менән Йәнбикәнең аралары алты йыл булыуға ҡарамаҫтан, бик дуҫ, татыу үҫтеләр. Өлкәне атаһына оҡшап, оҙон буйлы, етендәй сәсле, зәңгәр күҙле һылыу булһа, кесеһе, әсәһенә тартып, ҡыҫҡа буйлы, йомороraҡ кәүҙәле, сөм-ҡара күҙле сибәркәй. Бала саҡтағы татыулыҡ үҫә килә серҙәшлеккә әйләнде. Бер ауылда йәшәргә, көн дә күрешеп, ҡунаҡҡа йөрөшөргә хыялланған ҡыҙҙарҙың киләсәген яҙмыш үҙенсә хәл итте. Үлмәҫбикә училищела бергә уҡыған төҙөүсе егеткә кейәүгә сығып, бер-бер артлы ике малай тапты. Тәүҙә яҡшы ғына барған тормоштары, ире эсә башлағас, яйлап тигеҙлектән сыҡты һәм, соҡор-саҡырлы юлдан ана ауам, бына түңкәреләм, тип тәгәрәгән арба кеүек, оло хәүефкә әүерелде. Көнө-төнө айыҡмаған иренең әр-битәренән арынмаған Үлмәҫбикә һеңлеһен бик бәхетлегә һанап, бер аҙ көнләшә ине. Тәүҙәрәк үҙе ҡалала, бөтөн уңайлыҡтары булған фатирҙа, ә ҙур уҡыу бөткән "әртис" ҡарындашының ауылда йәшәүенә һауаланыбыраҡ ҡарай торғайны. Аҙаҡ унһң ғаиләһенең татыулығына ҡыҙыҡты. Бала саҡта сәй эсеп ултырғанда ла көңгөрмөңгөр ауыҙ эсенән көйләп, йә һикереп тороп, төрлө хәрәкәттәр яһап бейеп киткәнен мәрәкә күрһәләр, ҙурайғас, Йәнбикәнең шулайтып яңы бейеү һалғаны, көй сығарғаны асыҡланды.

Техникумды тамамлап, ошо районға эшкә ебәрелгәс, башкөллө бирелеп тотонды Йәнбикә һөнәренә. Клубта художество етәксеһе булып эшләгәс, ҡара төнгәсә унда, ә көндөҙ мәктәптә төрлө түңәрәктәр алып бара. Ауылдың ялҡытҡыс төҫһөҙлөгөнә яңы һулыш өрҙө, концерттар, спектаклдәр, байрамдар, онотолған йолалар... Өр-яңы йырҙар яңғыраны, әллә ниндәй милләт бейеүҙәре сәхнә күркенә әйләнде. Ситтән килеүселәрҙе бик һынап, силәктән үткәреп кенә, һайлап эҫендергән Ҡайынлы Йәнбикәне тиҙ үк үҙ итте, "Үҙебеҙҙең килен" тип йөрөттө. Ике йыл самаһы эшләгәс, артынан тотам ҡалмаған Сәмерханға яҙмышын бәйләне. Ике апаһы уны ҡалала төпләнергә өгөтләне. Ләкин Йәнбикә ауылда ҡалыуҙы хуп күрҙе. Стәрленең зәңгәр төтөнөн һулауым да бик еткән, ҡаланы маҡта ла, ауылда тор инде ул, тип ризалашманы. Колхоздың алдынғы шофёры Сәмерхан эшкә бөтмөр, ғаиләһе, хужалығы өсөн янып торҙо. Өс-дүрт йылда үҙ көсө менән йорт һалып сыҡты, кәртә-ҡура, мунса-аласыҡ күтәрҙе. Ҡыҙҙарының баш ҡалала йәшәүенә ғорурланып бөтә алмаған ата менән әсә генә улының ауылда ҡалыуына бот сабып аптыраны, бар ризаһыҙлығын килендәренә төшөрҙө. Эш тип мөкиббән киткән Йәнбикәнең ҡайныҡәйнәһе ыңғайына торорға ваҡыты ла, уйы ла булманы. Әйтерһең, ул ысын тормошта йәшәмәй, ә үҙе ҡорған хыял донъяһында, әллә ҡайҙа, күктә осоп йөрөй. Өйләнешеп, йыл ярым самаһы үткәс, Зәйтүнәне тапты ла, йәше тулыр-тулмаҫ эшкә сыҡты. Икенсе бәпәй хаҡында ишетергә лә теләмәне. Сәмерхан:

- Әйҙә, берәй ул йә ҡыҙ алып ҡайт әле, Зәйтүнәгә иптәш кәрәк бит, - тиһә,

- Һаулығым юҡ таһа, Сәмерхан, - ти ҙә ҡуя.

Һыуыҡ клубта көн тимәй, төн тимәй сабып, ысынлап та йыш сирләй башлағайны ул. Үпкәһенә, бөйөрҙәренә һалҡын тейҙереп, бер нисә мәртәбә дауаханала ятырға ла тура килде. Тик унһң был һүҙҙәрен Сәмерхан ғына етдигә һанаманы. Һуңғы арала бик теңкәһенә тейгәс, ауырға ҡалды Йәнбикәһе.

- Әммә ҡара уны, бәпәй табам тип, мин үлеп ҡалһам, балаларҙы етем итмә. Ҡаҡмай-һуҡмай үҫтер, үҙеңә лә балаһыҙ берәй тол ҡатын осрар әле. Балалар йортона тапшырып, интектерә күрмә. Мәңге бәхиллегем булмаҫ, - тигәйне.

- Кит әле, һантый, юҡ менән баш ҡатырма. Һин үҙең әллә нисә ирҙе үлтерерһең, бисәләр ғүмере нисә тиҙәр әле, ҡырҡ сыраҡмы ?

- Унһын Хоҙай белә. Ләкин минән ҡалһаң, ысын әйтәм, йәштән кәләш алма. Үҙе бала тапһа, минекеләрҙе ҡағыр. Йә өлкәнерәкте, йә бәпесе булмаҫтай ҡыҫырҙы ал...

Көйөнөсө бушҡа булған, бәпәйҙән иҫән-имен бушанды ла ул Йәнбикәһе, тик келт-келт һуҡҡан ғүмер сәғәтенең һуңғы туҡталышҡа етеп килеүен генә шәйләмәгәндәр. Өс айлыҡ Тимерханын күкрәк һөтөнән мәхрүм итеп керҙе шул һалҡын гүрҙәргә...

Ерләшергә килгән Үлмәҫбикә һеңлеһенең өҫтөнә ҡапланып иланы:

- Ошондай донъянды, алмалай сабыйҙарыңды ҡалдырып, нимә тип кенә киттең инде, Йәнбикә... Һиңә кәрәкмәгән донъяң кемгә кәрәк?.. - тип һулҡылданы.

Кәрәге булған икән шул.

- Улың бигерәк йәл. Үҙем генә алып көтөр инем, бажаңдың холҡо юҡ, сабыйға көн күрһәтмәҫ. Үҙем саҡ һыйып йәшәйем, - тип үрһәләнгән ҡайынбикәһенә Сәмерхан:

- Юҡты һөйләмә, тере сағымда баламды кешегә бирә буламмы һуң! Ҡалайтһам да үҫтерермен, - тип йыуатты.

- Атлап киткәнсе ауыр булыр. Ярай, йышыраҡ килеп торорбоҙ, ярҙамдан ташламабыҙ.

Ысынлап та һүҙендә торҙо Үлмәҫбикә, йыш килде, бигерәк тә ата-әсәһе вафат булғас, юлға туҙан ҡундырманы. Тәүҙә эштән һорап киттем, отгул алдым, тип аҡланһа, торараҡ ни сәбәп менән килеүен аңлатып тороуҙы кәрәк һанаманы. Йөҙ илле саҡырым яҡын ер түгел, көнөнә генә ҡайта алмаһа, ҡуна ла ҡалғыланы Үлмәҫбикә. Өйгә ҡот ҡунды, балалар ҙа эҫенде. Тәүҙәрәк ҡайынбикәһенән уңайһыҙланған Сәмерхан да яйлап күнекте, оҙағыраҡ күренмәһә, борсола ине. Эскесе иренә ҡушылып, үҙе лә төшөргөләгән ҡатын Сәмерхандың араҡыға битараф булыуына бер һөйөнһә, иплелегенә йөҙ ҡыуанды. Ә бер көн килеп бөтөнләйгә тороп ҡалды. Күрше-тирәнән, туған-тыумасанан тартынып, Сәмерхан унһң тиҙерәк бажаһынан законлы айырылыуын һәм ЗАГС-ҡа тороуҙы талап итте. Үлмәҫбикә шатланып ризалашты, сөнки иҫерек иренән ғарыҡ булған, ир еткән ике улынан да күңеле ҡайтҡайны.

**(Дауамы бар).**

ЗАУЫҠ

# БАШҠОРТЛОҠТО УЯТАМ ТИП КҮКТӘ

## Саңҡый йөрәк һыҙып ыласын

### Сулпанға

Шәкәр төҫлө аҡ биләүҙә
Балауыҙҙай йомшаҡ ҡына
Балдан татлы балам йоҡлай.
Кескәй генә йомғаҡ ҡына.
Хәләл һөттән ғаләм сере
Асҡысына тотонор ҙа,
Тып-тып атлап китер әле
Тупылдағым нығынып ҙа.
Тәүге аҙым абындыра,
Күҙ йәшенә ҡойондора.
Тик ҙур үҫкәс абынма һин
Тормош ҡорған уйындарҙа.
Тәүге һөттәй ыуыҙ ғынам,
Йөрәгемдең яртыһы һин,
Мөхәббәттең тамсыһы ла,
Икебеҙҙең ярсығы һин.

### Атайҙарһыҙ үҫә сабыйҙар

Көнсығыштан йылы елдәр иҫә,
Йылы елдәр беҙҙә буранлай.
Себерҙәрҙән сәләм төҫлө, гүйә,
Һыҙып ҡурай уйнай Буранбай.
Йөрәк зинданына биклән ҡуйған
Ярһыу хистәр әле сыҙамай.
Себер башҡорттары өсөн һинең
Һыҙа микән йөрәк, Буранбай!
Сынйырҙарға муйын уралмаған,
Бығауҙарҙа түгел ҡул-аяҡ.
Себерҙәргә бәйләй бәндәләрҙе
Күренмәҫлек бығау - ул тамаҡ.
Үҙ иләндә толҡа таба алмай,
Йортон ташлап киткән уҙаман.
Буранбайҙы һуҙып йырлай алмай,
Буранбайҙы тоймай был заман.
Зар иларлыҡ ҡарттар түгел илдә,
Зар илайҙар сабый балалар.
Атайҙарһыҙ үҫә сабыйҙар ҙа,
Атайлыҡты йота ҡалалар.
Хаттар яҙып, күрәҙәләр инең:
Ҡасан ғына башҡорт булыр бай?
Илебеҙҙә илһеҙ булмайыҡсы,
Ошо хаҡта хистәр буранлай.

***

Йөрәгемдең бирә, их, кәрәген
Сикһеҙ күктең моңло батшаһы.
Күңелемде сорнап ошо моңға
Килә әле күккә ашаһы.
Ер менән күк араһында ғына
Тыуған йырҙан йәндә тантана.
Һабантурғай яҙҙың йөҙөн аса,
Зәңгәр күктән илгә моң тама
Һабантурғай ҡанатына Ерҙә
Уралғандай яҙҙың нурҙары.
Сикһеҙ күккә мине алып осто
Ярһыу ҡоштоң моңло йырҙары.

***

Ҡарашыңда көйҙөм көҙгө
япраҡ һымаҡ,
Ҡоролоҡта янған үләндәй.
Ҡыуан елдә кипкән ағас төҫлө,
Мин сарсаным күңел үлгәндәй.
Яҙмышыма мәңге яҙылғанһың
Сүрә кеүек, йөрәк түремә.
Һин ерҙәге ялҡын, ә мин ташҡын,
Мөхәббәт бит бынан һүрелмәй.
Йән шишмәһе ғүмер йәншишмәһе -
Мөхәббәт бит ерҙә иң элек.

Фәнил БҮЛӘКОВ

Терелермен ярһыу тулҡын булып,
Мөхәббәттең йөнө мәңгелек.

***

Әгәр йәшен булһам, күкте ярып,
Һелтәп ялҡынланған ҡамсыны,
Гөрһөлдәтеп оран һалыр инем,
Уятырға теләп тамсыны.

Тамсыны мин ергә ташлар инем
Ҡояш нурҙарына әүәләп.
Ҡорғаҡһыған билен яҙыр ине
Изге генә тауым Әүәләк.

Милләтемден рухи сүллегенә
Тамған тамсы ҡамсы булһасы.
Башҡортлоҡто уятам тип күктә
Саңҡый йөрәк һыҙып ыласын.

Ағастарҙы янған сыра итеп,
Күкте үпте йәшен ут-ялҡын.
Ғәфләт йоҡоһонан ҡотолорға,
Телде ҡурсыр ваҡыт та халҡым!

***

Устарымды ҡыҙыу күмер өтә,
Йөрәгемдә дөрләй мөхәббәт.
Мин сырамы, майшәм, әллә усаҡ?
Янам, янам, һөйөү - мәрхәмәт!

Мәрхәмәтме һөйөү, әллә зәхмәт?
Күккә осоу, әллә ҡолаумы?
Йыһандарға йәнде осороусы
Әллә күҙҙе ҡаплар ҡылаумы?

Нисә тапҡыр йөрәк өтөүенән
Бер яратам тимен, бер танам.
Йөрәгемде устарыма ҡыҫып,
Мөхәббәттән дөрләп мин янам.

Һөйөүемде күккә осорғайным,
Күк күгәрсен сөйгән ишеләй.
Индәремдә гөрләй күк күгәрсен,
Мин яратам өҙөләп, кешеләр!

БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...

# ИЗГЕЛЕК ЭШЛӘ ЛӘ...

## һыуға һал



**Милләтебеҙҙең һәләтле улы, рәссам Әмир Мәзитовтың "Балыҡтар йыры. Йылғалар башы" тип аталған һүрәте бер кемде лә битараф ҡалдырмағандыр, моғайын.**

Минеңсә, был һүрәттә бер ырыуҙың (илдең) тормош карабы төшөрөлгән. Алғы пландағы ҙур, йыуан олонло ағастың тамырҙары ныҡлы, тәрән киткәнлеге һиҙелеп тора. Ошо ағас образы көслө, ҡеүәтле, боронғо заттар нәҫелен аңлата һымаҡ. Тик, ниңәлер, уның япраҡтары ла, емештәре лә бөтөнләй юҡ. Бер генә "емеш" булып яткан бала бишектә бәүелә. Бәлки, был ырыу (ил) ҡасандыр бик татыу, бер-берећенә ярҙамсыл, терәк булып ойошоп йәшәгәндер ҙә, ниндәйҙер сәбәп менән араларында татыулыҡ бөтөп, тарҡалғандарҙыр? Бәлки, улар шәриғәт ҡануңдарын боҙғандарҙыр, дөрөҫ юлдан тайпылғандарҙыр? Шуға ла, бәлки, уларҙың нәҫелдәре ҡорой башлағандыр? Бәлки, был ырыу (ил) - тарҡалған илебеҙҙер?

Аллаһы Тәғәлә киҫкен мәлдәрҙә үҙенең илселәрен ебәргән кеүек, уларҙы ҡотҡарыу маҡсаты менән ырыуға (илгә) бер бала бирә. Баланың йөҙө оло сырайлы. Тимәк, ул тәрән зиһенле, зирәк аҡыллы кеше буласаҡ. Изге күңелле, итәғәтле, тәүфиҡлы, кешелекле, кеселекле, һәр нәмәне уйлап эшләүсе шәхес булып үҫәсәк. Тап ул тарҡала башлаған ырыуҙы (илде) берләштерәсәк, татыулаштырасаҡ, һәр кемдең күңеленә үтеп инерлек һүҙҙәр таба беләсәк. Әммә үҙе баҫалҡы буласаҡ, эшләгән эштәрен, изгелек эшлә лә, һыуға һал, принцибы менән башҡарасаҡ. Бәйгәмбәрҙәргә, изгеләргә генә хас сифаттарға эйә буласаҡ ул бала. Балыҡтарҙың өнһеҙ йыры - ошо бишектәге шәхесте ҙурлау, тәбрикләү, сәләмләү, данлау йыры.

Карап тымыҡ һыуҙа тыныс ҡына йөҙә бирә. Тимәк, был ырыуҙың (илдең) тормошо яйға һалынасаҡ, йәмләнәсәк, кешеләре үҙ-ара татыу, бәхетле йәшәйәсәк. Ошо бала көслө рухлы балаларға ғүмер бирәсәк, тоҡомдары артасаҡ, нәҫел ағасы бик күп йәшел япраҡтар менән ҡапланасаҡ, татлы емештәр бирәсәк. Әгәр һәр кешенең ғүмерен туктамай аҡкан йылға образында күҙ алдына килтерһәк, саф һыулы йылғаларҙың башы ошо бишектә бәүелеүсе баланан башланалыр, моғайын.

Һәр кем үҙ ғүмерендә ағас ултыртырға, өй һалырға, улан-дар үҫтерергә тейеш. Балаһыҙ тормоштоң йәме юҡ. Нәҫелебеҙ ҡоромаһын өсөн дөрөҫ, тура юлдан барырға тейешбеҙ. Нәфсе ҡотҡоһона бирелмәй, матди байлыҡ артынан ҡыумай, тормош караптарыбыҙҙы рухи байлыҡтар, рухи ҡиммәттәр менән тултырырға тейешбеҙ.

Матурлыҡ донъяны ҡотҡарасаҡ, тигән әйтем бар. Матур холоҡ, ғәҙәттәр, һүҙҙәр, эштәр, ғилемдәр, мөнәсәбәттәр - рәссам был һүрәтендә бына ошолар тураһында аңғартырға теләй, минеңсә. Тормош караптарыбыҙ балыҡтар данлап йырларлыҡ ошо матурлыҡтар менән тулы, киләсәгебеҙ өмөтлө булһын ине. Әлеге мәл йылғаларҙың башы ғына.

Гөлйемеш БИКЙӘНОВА.
Учалы ҡалаһы.

ЗАУЫҠ



# ӘСӘЙЕМ ҺАБАҠТАРЫ

* * *

Сабыр төбө - һары алтын,
Сабырлыҡ кәрәк көн дә.
...Ҡайҙа ҡалғанбыҙҙыр, Хоҙай
Сабырлыҡ өләшкәндә?
"Сабырһыҙ Йәмилә" ине
Әсәйем дә халыҡта,
Тормош яйлап өйрәткәндер
Йәшәргә сабырлыҡта.
Апайҙарым донъя көтә
Бер-берећен уҙышып-
Сабырлыҡ тараҡкан саҡта
Йөрәгендәр аҙашып!
Мин үҙем дә ҡайһы берҙә
Тоткан ерҙән һындырам,
Әсәйем әйтә торғайны:
"Булма улай яндырай!"
Яндыраймын, ә шулай ҙа,
Етһә яуаплы миҙгел,
Һалҡын ҡанлы булыу миңә
Бөтөнләй ҡыйын түгел.
Ихтыяр көсөмдө туплап,
Йәшереп йәрәхәтте,
Йылмайыу менән ҡаплайым
Йәндәге ғәрәсәтте.
Сәйнүк булһам, ҡайнар инем
Күтәрелеп ҡапҡасым...
Кәметмә бер үк, Хоҙайым,
Сабырлығым запасын!

* * *

"Һөйгәнемдең хаҡына
Һөймәҫемде һөйөмен"-
Әсәйемдең был һабағын
Баштан үткәс, беләм мин.
Йәш саҡтарҙа гәжәп ине:
Нисек аңлап белергә?
Үҙ-үҙеңде көсләп, ниңә
Һөймәгәнде һөйөргә?
Йәшлек менән, әсәйемә
"Ике йөҙләлөк", тинем,
Беҙҙең ғаиләне һаҡлай
Тип уйламаған инем.
Әсәйемдең "һөйә" торған
Кешеләре күп ине:
Өс килен һәм ете кейәү,
Һәр береће "шәп" ине.
Кеше алдында әсәйем
Һәммәһен маҡтай ине:
"Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙы миңә
Хоҙай һайлаған", тине.
Ирҙән зарланырға булып,
Сер һөйләнем бер заман.
Һүҙ тейҙермәне иремә:
"Һин, балам, үҙең яман!"
Һәр кейәүе әсәйемде
Бик яҡын күрә ине:
Иң "шәбе" ул икәнлеген
Һәр кейәү белә ине...
...Тормош өйрәтте мине лә
Һөймәҫтәрҙе һөйөргә,
Әрләр ерҙә өндәшмәҫкә,
Илар ерҙә көләргә.
Һөйгәндәреңдең хаҡына
Күп нәмәгә түҙәһең:
Әйтер ерҙә тел тешләйһең,
Дөрләр ерҙә һүнәһең.
Эй хаҡлы булған әсәйем!
Янамын да һүнәмен,
Һөйгәндәремдең хаҡына
Һөймәҫте лә һөйәмен...

Фирүзә АБДУЛЛИНА.

(Дауамы бар).

ИНТЕРНЕТТАН



# ВЫЖДАНЛЫҠ ТОЙҒОҺО... ҡайҙа йәшәй?

■ Әгәр ҙә баланың холестерин кимәле күтәрелгән икән, уның сәләмәтлегә хаҡындa ныҡлап борсолорға урын бар, тип иҫәпләй табиптар. Франция педиатрҙары ойошмаһының туҡланыу буйынса комитеты 2-10 йәшлек балалар араһында тикшеренеүҙәр үткәргән һәм уларҙың 5 процентында холестерин кимәле юғары булыуын асыҡлаған. Ҡайһы бер илдәрҙә, мәҫәлән, АҠШ-та был күрһәткес 20 процентҡа барып баҫа. Балаларға был ауырыу нәҫелдән дә күпләп күсә, өлкәнәйгәс, уның йөрәк ауырыуҙарына осрауы, ғүмере ҡыҫҡараҡ булыуы ихтимал. Хәүефте түбәнәйтеү өсөн дарыу терапияһынан тыш, туҡланыу режимын да үҙгәртергә кәрәк. Бының өсөн балаларға майҙар ашатмаҫҡа, ә йәшелсәемешкә өҫтөнлөк бирергә кәңәш итә белгестәр.

■ Һәр кем үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла сағыу, төҫлө һәм бер аҙ сәйер төш күргәне барҙыр. Британия психологтары ҡайһы көндәрҙә ниндәй төштәр инеүен асыҡларға тырышып ҡараған. Бәхтиһәң, ай тулған осорҙа кешеләр матур төштәрҙе күберәк күрә. Шулай уҡ йоҡлаған сакта ишеткән төрлө тауыштар ҙа төшкә йоғонто яһай икән. Һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың мейеһе был тауыштарҙы төрлөсә ҡабул иткән, кемдер төшөндә аждаһала осоп йөрөгән, кемдер берәй билдәле шәхес менән ҡәһүә эскән, кемдер супергеройға әүерелеп, енәйәтселәр менән көрәшкән. Психологтар әйтеүенсә, был аҫтыҡ һөҙөмтәһендә төндә насар йоҡлаусыларға ярҙам итергә мөмкин. Ҡоштар һайрауы кеүек тәбиғәт тауыштарын тыңлап йоҡлағанда төштәрҙе "программалап" була, ти улар.

■ Британия ғалимдары раҫлауынса, 45 йәшкә еткәндән һуң кешенең интеллектуаль һәләттәре түбәнәйә башлай. 45-70 йәштәге 7 мең кешене 10 йыл тикшергәндән һуң, ғалимдар уларҙың когнитив һәләттәре, хәтер һәм иғтибар юғалыуын күрһәткән. Шулай уҡ уларҙың һүҙлек запасы ла наҡыҫлана икән.

■ Оксфорд университеты белгестәре кеше организмында выждандың ҡайҙа урынлашыуын асыҡлаған. Тикшеренеү барышында 25 ҡатын-ҡыҙ һәм ир-аттың, шулай уҡ макакаларҙың баш мейеһенең маңлай ҡабығын сканерҙан үткәргән. Билдәләнеүенсә, маймылдарҙа был өлөш - 11, ә кешелә 12 бүлемдән тора икән. Тикшеренеүҙәрҙең авторы Мэтью Рашуот әйтеүенсә, баш мейеһенең тап ошо өлөшө яҡшыны ямандан айырырға, башҡаларҙың ҡылығын анализларға, шулай уҡ выждан ғазабын кисерергә мөмкинлек бирә. Ул ҡаштарҙың өҫтөндә урынлашҡан. Иң ҡыҙығы, мейенең был өлөшө кемдәләр әстерхан сәтләүеге, кемдәләр мандарин ҙурлығында.

■ Орегона һәм Бостон университеттары хеҙмәткәрҙәре төрлө йәштәге ир-егеттәрҙә һынауҙар үткәреп, ҡайһы йәштә көслө зат тормошто тик ыңғай яҡтан ҡабул итә башлауын асыҡлаған. Ирҙәр 70 йәштә тормоштарындағы күп нәмәне контролдә тота алмауҙарын аңлай, шуға ла был иң киҫкен осор тип билдәләнгән. Шулай ҙа сәләмәтлегенең торошона ҡарап, ир-егет өсөн иң ауыр мәл булып 60 йәки 80 йәш тора. Белгестәр билдәләүенсә, өлкән йәштәге ир-ат юҡ ҡына әйбергә лә шатланырға өйрәнә.

АҢДАН - ҠАНҒА, ҠАНДАН - ЗАҢҒА

**Халҡыбыҙҙың тәрбиә ҡанундары менән ҡыҙыҡһына башлағандан алып, мине бер нәмә һоҡландыра: ул да булһа, әлегәсә һаҡлана килгән төп сифаттарҙың береһе - рухи ныҡлыҡ. Боронғо картаға күҙ һалһаҡ, төрлө-төрлө милләттәр менән бергә башҡорттар ҙа билдәләнгән. Әммә был карталарҙа урын алған халыҡтар бөгөнгө көндә юҡ: йә йотолған, йә ер йөҙөнән юғалған. Башҡорт йәшәй һәм башҡортлоғон юғалтмай йәшәй. Артабан да йәшәргә тейешбеҙ.**

**Беҙ әле донъяға үҙебеҙҙең кемлегебеҙҙе фәҡәт рухи азатлыҡҡа ынтылыусы яугир халыҡ булып ҡына танытҡанбыҙ. Һәм, әлбиттә, ҡайһы бер уҙамандарыбыҙ тырышлығы менән сәнғәтебеҙ, ҡымыҙ, солоҡ балы кеүек ризыҡтарыбыҙ ҙа киң танылыу ала. "Урал батыр" эпосының киң майҙан тота башлауы ла ҡыуандыра. Ә күпме ғилем ята халҡыбыҙҙың аҡыл хазинаһында! Башҡорт беренселәрҙән булып металл эшкәрткән, булат ҡылыс ҡойған, борон-борондан шифалы үҫемлектәр серен белгән, дауалау сифатына эйә булған файҙалы ризыҡ менән туҡланған, йән һәм тән сәләмәтлеге өсөн ыңғай йоғонто яһаған тәбиғи музыка ҡоралы - ҡурайҙы уйлап тапҡан, йән дауалау сараһы - оҙон көйҙәр ижад иткән, иртәнге ҡояш нурҙарынан сихәт алған, ҡот ҡайтарған... Йәшәгән төбәгебеҙҙең әүлиәләр иле икәнлеген донъяның дин әһелдәре күптән таный. Һәр халыҡтың ғилеме - халыҡтың үҙендә. Был ғилемдә өйрәнеү аҫкысы - туған телендә. Беҙгә, ғилемебеҙҙе байҡау аҫкысы ҡулыбыҙҙа булған башҡорттарға, уларҙы өйрәнеү, донъя кимәленә башҡорттоҡо итеп танытыу мотлаҡ! Уның өсөн төп шарт - беҙ, милләт булараҡ, йәшәргә һәм үҙебеҙҙең рухи байлығыбыҙҙы башҡорттоҡо итеп мәңгеләштерергә тейешбеҙ.**

**Халҡыбыҙ рухи ныҡлығын, рухи сәләмәтлеген, сафлығын нисек һаҡланы икән? Ошо һорауҙарға яуап табыу өсөн боронғоларҙың аҡылына күҙ һалырға кәрәк. Ниндәй ауыр мәлдәрҙә лә рухы ҡаҡшамаған халҡым ниндәй аҡыл менән йәшәгән? Гәзитебеҙҙең был рубрикаһында өлкән быуын кешеләренән халҡыбыҙҙың тәрбиә ҡанундарын өйрәнеү, йәштәргә еткереү маҡсаты менән буталсыҡ заманда ла юғалып ҡалмаған, бөгөнгө көндә уңыш ҡаҙанған егеттәребеҙ һәм ҡыҙҙарыбыҙҙың олатай-өләсәйҙәре менән осрашып һөйләшеүҙе йәки балаларының улар тураһындағы хәтирәләре менән танышыуҙы маҡсат итеп ҡуйҙым.**

# ЯҠШЫҒА КЕМ ДӘ ЯҠШЫ -

## яманға яҡшы булып ҡара!

Өфөлә генә түгел, республикабыҙҙа "халыҡ врачы" тигән исеме таралған Мәхмүзә атлы профессорыбыҙ бар. Кем генә белмәй уны! Кем генә уның мәрхәмәтенән файҙаланмай! Ул ярҙамға мохтаж һәр кеше турaһында хәстәрлек күреүҙе, үҙе йәки таныштары аша ярҙам итеүҙе бурысы итеп алған һымаҡ. Кешелә ул тиклем ярҙамсыллыҡ, кешелеклелек, изге күңеллелек ҡайҙан килә? Ғаиләлә ниндәй сифаттар тәрбиәләнгән?

Медицина фәндәре докторы, профессор, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған табибы Мәхмүзә Кәлимулла ҡыҙы Ғәйнуллинаның әсәһе менән осрашып һөйләшкәс, был сифаттарҙың рухи ныҡлыҡтан, үҙ-үҙеңә ныҡ ышаныуҙан, кеше хәленә инә белеүҙән икәнлеген аңланым. Насретдиновтар, йәғни Мәхмүзә Кәлимулла ҡыҙының туғандары араһында ғына ла бер тиҫтә медицина хеҙмәткәре булыуы ғәжәп кешелекле һәм ярҙамсыл булыуҙарының да төп сере - рухи ныҡлыҡта, ихтыяр көсөндә, үҙ-үҙеңә ныҡ ышаныуҙа бит! Ә рухи ныҡлыҡтың сере ниҙә? Әлбиттә, был хаҡта үҙҙәренән иң элек әсәй кеше - Сафия Насретдинованан һораштым.

- Рухи ныҡлыҡ нәҫелдән килә. Ике яҡлап та. Атайҙары яғынан да, минең яҡтан да. Шуға бирешмәнек, һынмаҙыҡ. Беҙ бит совет власының "кулак балалары" тип ситкә тибелгән, ҡыйырһытылған үгәйҙәре. Шулай булғас, үҙеңде юғалтмау, был донъяла кем икәнлегеңде раҫлау өсөн көс унлата күберәк кәрәк булды, - тип һөйләп китте ул.

Сафия апайҙың атаһы Хәбиәхмәт Нурғәлиевтың үҙ ҡул көсө менән һалып ингән өс бүлмәле ағас йорто, бер нисә һыйыры, аты була. Колхозға иң беренселәрҙән яҙыла, мал бирә, тәүгеләрҙән булып большевиктар партияһына яҙыла. Әммә Нуриман районы Ишморат ауылынан уны 1932 йылда "кулак" тип һөргөнгә ҡыуалар. Районда килгән "Шакал" ҡушаматлы ир шөғөлләнә был эш менән. Шулай итеп, Сафияның атаһы Хәбиәхмәтте Силәбе өлкәһенә эшкә ебәрәләр, ә ҡатыны Кафияны алтынсы балаһына ғоманлы көйө мунсаға ҡыуып сығаралар. Йорт-ҡуралағы бөтөн нәмәләрен, хатта йәмкәләренә тиклем тартып алалар. Кафия алтынсы балаһын мунсала таба. Ул баланың кендек инәһе Сиҙиҡа исемле ҡатын мөләйем, ипле, әҙәпле була. Шуға ла ниндәй кәртәләр аша бында килеп етеүен Кафияға өндәшмәй. Баланы тыныс ҡына ҡабул итә. Иҫке-моҫҡонан йүргәктәр әтмәлләй, әммә бик һаҡ ҡылана, аҙ ғына тауыш та уны шомға һала, тик йәш балаһын ҡулына алған Кафияға өҫтәмә борсолоуҙар тыуҙырмаҫ өсөн бер ни ҙә һиҙҙермәй. Баҡһаң, ул саҡтағы колхоз рәйесе, Хәбиәхмәттең яҡшы атын атланып йөрөһә лә, Кафия янына барыуҙы тыйған икән. Ул ғына ла түгел, иң беренселәрҙән булып һыйырын етәкләп, колхозға тапшырған был ғаиләгә тәрән ризыҡ бирмәҫкә, һөт алып бармаҫҡа, тип, ауылдаштарын саҡыртып иҫкәртә йөрөгән. "Мин батрак" тип күкрәк һуғып, ялҡаулыҡты маҡтаныу итеп алған замандарҙа, Хәбиәхмәттең ярҙамын байтаҡ ҡына күргән был әҙәм шулай ҡайтара изгелек хаҡын. Әммә башҡалар йәшерен-боҫорон ғына ярҙам итәләр Кафияға. Кафия сабыйын алты йәшлек Сафияға ҡалдырып, үҙе эшкә йөрөй. Ә өлкән ир балалары Исламғол менән Исламетдин йомран оя һынан ашлыҡ йыя. Уларға Алмас исемле эттәре ныҡ ярҙам итә. Ул йомран оялары табыша. Һәр йомран ояһы оло табышҡа әйләнә. Ҡыш көндәре эт ҡуян тота. Малайҙар әсәйҙәрен тынысландыра: "Әсәй, этебеҙ генә иҫән булһын, астан үлмәбеҙ", - тиҙәр.

Хәбиәхмәт, йыл да үтмәй, төндә бер кемгә лә һиҙҙермәй генә килеп, ғаиләһен Ашаға күсереп алып китә. "Кулак эттәрен мәкегә тултырырға кәрәк булған", - тип ҡоторона колхоз рәйесе был хәлде ишеткәс. "Был тиклем ҡотороноҡа бер кем дә ҡушмай бит уға, үҙенән-үҙе шулай яуыз кеше инде. Кешенең эсе тулы яуызлыҡ булһа, үҙенән-үҙе юҡҡа сыға. Аҡ янына - аҡ, ҡара янына ҡара эркелә бара. Бөгөн былаймын, тип маһайырға ярамай. Бөгөндөң иртәгәһе бар. Берәү ҙә аумаҫ ҡалпаҡ кеймәгән, балалар. Байлыҡ та, вазифа ла мәңгелек түгел", - ти Кафия балаларына. Ире килеп алып киткәс, үҙен ожмахтағылай хис итә ул. Хәбиәхмәт Аша ҡасабаһында химия заводында бик тырышып эшләй. Ғаиләһен бағырлыҡ эш хаҡы ала, Кафия бик оҫта хужабикә була. Матур йәшәп китәләр, тик Башҡортостанды һағынып, кире ҡайталар. Әммә Хәбиәхмәттең колхоз рәйесенә нәфрәте көслө була, күрше ауылға ҡайта. Аҙ ғына ваҡыт эсендә бынамын тигән итеп донъяһын ҡороп ала.

Илебеҙҙә ун миллион иң-иңдәрҙе "аҡтар" тип, тағы тиҫтә йылдан һуң дин әһелдәрен - коммунистарҙың дошманы, тип, унан һуң ауыл хужалығы белгестәрен - кулак тип Себергә ебәреп бөткәндән һуң, сәйәсәт тә, ауыл хужалығы ла ныҡ ҡаҡшай, "аҡылдарыбыҙ" башҡа илдәргә хеҙмәт итә. Ә илдә халыҡ дошманы балаһы, кулак балаһы, мулла балаһы, туғаны аҡтарҙа хеҙмәт иткән, тип былымын тигән һәләтле балаларҙа, яңы тормош юлына баҫҡан йәштәрҙе ҡыйырһытыу, уҡыуҙан ҡыуыу, комсомолға алмау кеүек ғилем менән рух һындырыу сәйәсәте алып барыла.

Кулак Хәбиәхмәттең ҡыҙы Сафияға ла аҙым һайын татырға тура килә был сәйәсәт һипкенен. Үҙе йәшәгән ауылда ғына түгел, хатта тирә-яҡтағылар ҙа "ҡоро ҡалмай". Нуриман районының Яңы ҡул ауылына килен булып төшкәс, ире Кәлимулла менән элекка сығалар. Шунда ауылдан берәү: "Йөрөмәгеҙ сабынлыҡ тапап, бында кулак ере юҡ", - тип, төртмә телләнеп үтеп китә. Ул ғына ла түгел, хатта йылдар үтеп, үҙ балалары була башлағас та, ул осор өсөн иң яман "кулак балаһы" тигән һүҙ онотолмай. Урамға балалар менән уйнарға сыҡҡан саҡтарында: "Әсәйең кулак балаһы", - тип, уйнатмай, ҡыуып ҡайтаралар балаларҙы. Имеш, байлыҡ - ул социалистик ҡоролош өсөн ят күренеш, кеше ярлы



Сафия Хәбиәхмәт ҡыҙы балалары менән.

йәшәргә тейеш. Ярлылыҡ - йәшәү рәүеше. Сталиндың бер генә шинеле булған, Ленин хатта ҡаты ауырыған сағында ла үҙенә тәғәйен шоколадты балаларға ебәрткән. Уҡырға ингәндә - атаһының батрак булыуы, вазифалы урынға дәғүә иткәндә - хеҙмәт юлын ҡара эшсе булып башлау байраҡ итеп иң алда елпелдәтелгән замандар ине. Сафияның балалары ни өсөн ҡыйырһытылғанлыҡтарын да аңлап етмәй, тик "кулак" тигән һүҙең бик яман икәнлеген, әсәләренең яман кеше балаһы булыуын ғына аңлайҙар. "Әсәй, кем ул кулак?" тигән һорауға нимә тип яуап бирһен Сафия? Ер эшен һәйбәт белгән, үҙ ҡул көсө менән донъяһын бөтәйткән, ғаиләһен матур баҡҡан, арымай-талмай эшләп мал тапҡан, йоҡо һимертеп ятмаған, етеш йәшәгән, әммә сереп байымаған кеше кулак була, типме? Улай тиһәң, ни эшләп "кулак - дошман" тиҙәр, тип аптырар бала. Бала түгел, өлкән кешене аптыратырлыҡ, аңға һыймаҫ хәлдәр әле лә уйылып китерлек уйҙарға һала.

Ә ошондай аңға һыймаҫ хәлдәрҙе нисек теләнеләр, үҙ файҙаларына нисек кәрәк - шулай аңлаттылар халыҡҡа. "Кайғырма, әсәһе, бер йыл тартай һимерә, икенсе йыл - бүҙәнә", - тигән Сафияның атаһы йыуаныр-йыуатыр һүҙҙәр әҙләгәндә. Заманалар алмашынды, кемдең кем икәнлеге асыҡланды. Әммә яралар тәрән. Кимнекимне исҡә төшөп, һаман һыҙлай. Алты йәшендә күршеләренә һөт һорарға инеп, буш көрөшкә тотоп илай-илай сығып киткәнен, бәләкәй һылыуым үлә инде хәҙер, тип һығылып-һығылып илағанын әле лә иҫләй ҙа... "Кыҙың профессор бит, әсәйем ҡаты ауырый", - тип, ярҙам һорарға килгәс, атаһының һүҙҙәре иҫенә төшә. Бер йыл тартай һимерә, бер йыл - бүҙәнә... "Мәхмүзә ҡыҙым, ауырһынмай ғына ярҙам ит инде", - ти ҡыҙына. Мәхмүзәнең аптыраулы ҡарашына барыһын да аңлап: "Уларҙың ни гәйебе?" - тигәндәй, ҡарашы менән генә яуап бирә. Мәхмүзә лә төрлө һылтауҙар табып, ярҙамдан баш тарта ала ла бит... Юҡ, улар икенсе тәрбиә алғандар шул. "Күнелегеҙ ныҡ булһын, тик ҡаты булмаһын!" - тип ҡабатлай уларға өлкәндәр Хәбиәхмәт уҙамандың аманатын.

Хәйер, ҡасандыр уларҙы кулак тип рәнйетеүселәрҙең балаларының тормошон күрә йөрөйҙәр, уларҙың береһе лә ниндәйҙер бейек үргә өлгәшә алманылар, киреһенсә, меҫкенләнеп йәшәгәндәре бар араларында.

- Хоҙай үҙе күрә, үҙе тигеҙләй, балам. Унан өҫтән булырға ярамай. Яманлыҡ бөлдөрә, яҡшылыҡ тун кейҙерә. Яҡшылыҡ менән еңегеҙ. Күнелегеҙҙе яҡшы нурҙар ғына балҡытып торһон, - тип өйрәтә Сафия ла балаларына.

- Әсәй, улар көслө саҡтарында һинән көлгәндәр, кәмһеткәндәр. Ә һин уларға бөтөнләй рәнйемәйһеңме ни?

- Әрнеһәм, әрненем. Әммә рәнйемәнем. Һеҙ ҙә бер ваҡытта ла кешегә рәнйемәгеҙ, рәнйеш төшә. Кеше таш менән атһа ла аш менән атығыҙ. Яҡшыға кем дә яҡшы. Уға аҡыл кәрәкмәй. Ә һин яманға яҡшы бул. Ана шул аҡыл була. Изгелек бер ваҡытта ла ерҙә ятып ҡалмай... - ниндәй ауырлыҡтар үткәрһә лә рух юғарылығын да, кеше булып йәшәү бәсен дә юғалтмаған атаһынан ҡалған һабаҡты балаларына шулай тапшыра Сафия. Атаһының башҡа һабаҡтарын да ул һәр саҡ иҫтә тота. "Күнелегеҙ ҡаты булмаһын, ныҡ булһын. Күңеле ҡаты кеше үҙен бөлдөрә, күңеле ныҡ кеше бер нәмәгә лә бирешмәй, маҡсатына елдерә. Бына мине лә үлтерергә теләнеләр - үлмәнем, хәйерсе хәлenә ҡалдырырға теләнеләр - яңынан бауыр ҡалҡыттым, балаларыма юғары уҡыу йорттарының ишеген ябырға теләнеләр - баштары эшләгәс, ҡандарында зирәклек һаҡланғас, күңелдәре ныҡ булғас, бер ни ҙә ҡыла алманылар. Мыҫҡылларға теләнеләр - әлеге лә баяғы күңел ныҡлығы ҡотҡарҙы. Ғорурлығымды ла, бәсемде лә төшөрә алманылар. Атай-олатайҙарҙан ҡалған ныҡлыҡ ул. Атайым: "Көлгә күмһәләр, көлөп килеп сыҡ, балсыҡҡа батырһалар - балҡып килеп ҡалҡ", - ти торғайны", - тип, атаһынан ҡалған аҡылды ул үҙ балаларына һүҙ менән дә, өлгөһө менән дә һеңдерә.

Күңелегеҙ ҡаты булмаһын, ныҡ булһын. Быуындан-быуынға күсә килә ошо аҡыл. Мәхмүзә Кәлимулла ҡыҙының һоҡланырлыҡ ҡына түгел, аптырарлыҡ ярҙамсыллығының шишмә башы бына ҡайҙарҙан башлана икән! Шулай күсә халыҡ аҡылы.

1995 йылда Сафия Насретдинова атаһының исемен аҡлай. Әммә туғандары, яҡындары, дуҫ-иштәре өсөн Хәбиәхмәт бер ваҡытта ла халыҡ дошманы булманы. Ә балалары, ейәндәре, бүләләренең булмыштарында, йәшәйештәрендә, хәтерҙәрендә уға бер ваҡытта ла ҡара төшөрөлмәне, һәр саҡ аҡ булып ҡалды.

Профессор Мәхмүзә Кәлимулла ҡыҙының атаһы яғынан килгән ғилемлек тураһында ла ауыҙ тултырып һөйләрлек һабаҡтары бихисап. Насретдиновтарҙа табиптарҙың күп булыуында Кәлимулланың әсәһе Зәбәйҙәнең йоғонтоһо ҙурҙыр. Ул һәр үләндең атамаһын, тәғәйенләнешен белә. Ниндәй ауырыуҙан ниндәй үлән менән дауаларға икәнлеген ҡайҙан белгәндер, ҡайҙан өйрәнгәндер?

- Мине урманға алып сыға ла көн һайын бер нисә үлән тураһында шул тиклем ентекләп, тәфсирләп һөйләй торғайны... - тип иҫләй Мәхмүзә Кәлимулла ҡыҙы. - Үҙе минең ыңғайға аҡрын ғына атлай. Йыя бара, һөйләй бара. Ҡайтҡас, киптерергә һала. Унда ла үҙе белгәндәрен өйрәтә. Киптергәндән һуң, бәләкәй генә төксайҙарға һалып, һандығына урынлаштыра. Ҡыш көндәре ул һандыҡтан йәйге хуш еҫ аңҡып китә торғайны. Айыу үте лә була торғайны унда. Тик бик бәләкәй инем шул. Дауалау ысулдарын отоп ҡала алмағанмын. Ул фани донъянан киткәндә, минә ун йәш кенә ине. Шуныһы ғәжәп, уның телмәре мәкәл, шиғыр, хатта таҡмаҡтарһыҙ булманы. Беҙгә лә ятлата ине. Ятлағыҙ, зиһенегеҙ яҡтырыр, күнекмә лә булыр, ти торғайны. Ейәнейәнсәрҙәрен бик ярата ине, уларға әкиәттәр, легендалар, риүәйәттәр һөйләне. "Сепрәк-сапраҡ бол түгел, ашауҙан йәлләмәгеҙ, ғилемгә ынтылығыҙ. Ризыҡты тәмле итеп әҙерләгеҙ, ауыҙ тәмен ебәреп, ары-бире ашамағыҙ. Ашау - һаулыҡ бит ул. Сит-яттарҙы үҙем тимә, серенде ситтәргә асма, көлдөрөп ултырһа ла бөлдөрөүе ихтимал, үҙеңдеке ҡаты әйтһә лә яҡшыға әйтер. Кеше иң ауыр сағында туғанға арҡалана. Туғандан ситләшмәгеҙ", тигән аҡылды һеңдерә ул беҙгә. Ҡаҡса ғына кәүҙәле, етеҙ хәрәкәтле, хатта егерле булды атайымдың әсәһе. Бәләкәй саҡта, илап ебәргән осраҡтар булғандыр инде. Ҡарап тора ла: "Көлгәндә генә түгел, илағанда ла ихлас булығыҙ. Ихласлыҡ юғалған ерҙә ялған башлана", - ти торғайны.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Был рубрикала ниндәй һабаҡтар тураһында һөйләнеләсәк икәнен аңлағанһыҙҙыр, уҡыусым. Уҡып сыҡҡас, һинең күңелдә лә атайың, әсәйең, олатай-өләсәйҙәрең нәсихәттәре, өйрәткәндәре, һабаҡтары тураһындағы хәтирә баҙлап киткәндер. Аҙаҡҡа ҡалдырмай, хәтерендәгеләрҙе аҡ ҡағыҙ битенә сыймаҡлай һал, зинһар. Халҡыбыҙ аҡылы, тәрбиә ҡанундары тураһындағы китапты бергәләп яҙайыҡ.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

**Мөнәсәбәттәр: әгәр кешеләргә яҡшы мөнәсәбәттә булһағыҙ, улар һеҙгә шундай уҡ мөнәсәбәт менән яуап ҡайтарыр**

**Лидер йөрәгенә эйә булырға - кешеләрҙе яратырға кәрәк.** Компьютер хеҙмәттәре күрһәтеү буйынса Difinitive Computer Services фирмаһының президенты һәм генераль директоры Генри Груленд был фекерҙе түбәндәгесә аңлата: "Лидер булыу - етәксе булырға теләүҙән ҙурыраҡ. Лидерҙар башҡаларҙың хәленә инә белә һәм уларҙың кире яҡтарын түгел, ә яҡшы яҡтарын табыу һәләтенә эйә. Сөнки улар ысынлап та кешеләр хаҡында хәстәрлек күрә". Әгәр кешеләрҙе яратмайһығыҙ икән, һеҙ йоғонтоло лидер була алмайһығыҙ. Физик Альберт Эйнштейн быны былай тип аңлатҡан: "Беҙҙең ерҙәге хәл-торошобоҙ бик сәйер. Һәр ҡайһыбыҙ бында сәбәбен белмәгән ҡыҫҡа сәфәргә килә. Шулай ҙа ҡайһы берҙә, тойомлау ярҙамында, үҙенең маҡсатын аңлай шикелле. Көндәлек тормош күҙлегенән сығып ҡарағанда, беҙ белгән йәки белергә тейешле бер нәмә бар: кеше ергә башҡалар хаҡына килә".

**Кешеләргә ярҙам ҡулы һуҙырға кәрәк.** Лидер артынан эйәреүселәр һәр саҡ үҙҙәре хаҡында хәстәрлек күргән лидерҙы ихтирам итә. Әгәр нимәләр алыуға түгел, ә башҡаларға нимә бирә алыуығыҙға иғтибар туплаһағыҙ, һеҙҙе һәр саҡ яратасаҡтар һәм ихтирам итәсәктәр. Был оҙайлы мөнәсәбәттәр ҡороу өсөн ныҡлы нигеҙ булып тора.

**Уйланырға мәжбүр итеүсе һорауҙар.** Кеше менән аралашыу һәм бәйләнештәр булдырыу һәләтегеҙҙе нисек баһалайһығыҙ? Таныш булмаған компанияла үҙегеҙҙе яҡшы хис итәһегеҙме? Төрлө психологик төркөм кешеләре менән уңышлы аралаша алаһығыҙмы? Һис бер ауырлыҡһыҙ кеше менән уртаҡ тел табаһығыҙмы? Ә оҙайлы мөнәсәбәттәр ҡора алаһығыҙмы? Әгәр кешеләр менән мөнәсәбәттәр булдырыу өлкәһендә һәләтегеҙ юҡ икән, лидерлығығыҙ ҡасан да булһа күрсәккә терәләсәк.

**Өйгә эш.** Тирә-яҡтағылар менән мөнәсәбәттәрегеҙҙе яҡшыртыу өсөн, түбәндәгеләрҙе эшләгеҙ:

- Аңығыҙҙы үҫтерегеҙ. Әгәр кешеләрҙе аңлай белеү һәләтегеҙ камиллашыуға мохтаж икән, быны өсөн ошо темаға ҡағылышлы китаптар уҡып, камиллыҡҡа табан барығыҙ. Һуңынан алған белемегеҙҙе һынап ҡарау өсөн кешеләрҙе күҙәтеп, улар менән аралашырға ваҡыт йәлләмәгеҙ.
- Йөрәгегеҙҙе нығытығыҙ. Әгәр башҡалар тураһында етерлек хәстәрлек күрмәһәгеҙ, үҙегеҙ тураһында уйлауҙы туҡтатығыҙ. Дуҫтарығыҙ һәм коллегаларығыҙ өсөн эшләй ала торған "ваҡ-төйәк"тең исемлеген төҙөгөҙ. Һуңынан көн һайын уларҙың береһен тормошҡа ашыра барығыҙ.
- Боҙолған мөнәсәбәттәрҙе тергеҙегеҙ. Ни сәбәптәндер өҙөлөп ҡалған һәм һеҙҙең өсөн әһәмиәтле булған оҙайлы мөнәсәбәттәр хаҡында уйлағыҙ. Уларҙы ҡабат тергеҙеү өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләгеҙ. Әгәр талашҡанһығыҙ икән, ғәйебегеҙ өсөн яуаплылыҡты өҫтөгөҙгә алып, ғәфү үтенегеҙ. Ошо кешене яҡшыраҡ аңларға, уны яратырға һәм уға ярҙам итергә тырышығыҙ.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**



## ПОНЕДЕЛЬНИК 1 СЕНТЯБРЯ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.10 "Добрый день".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Позднее раскаяние". Худ. фильм (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Учителя". Мелодраматический сериал. 1-я и 2-я серии (16+).
23.30 "Первая Мировая" (12+).
00.45 Ночные новости.
01.00 "Форс-мажоры" (16+).
01.50, 03.05 "Выдуманная жизнь эбботов". Мелодрама (12+).
03.00 Новости.
03.55 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Выборы-2014".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.45 "Вести-Башкортостан".
18.05 "Вести. Дежурная часть".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Узнай меня, если сможешь". Остросюжетный сериал. 1-4-я серии (12+).
00.35 "Дежурный по стране" Михаил Жванецкий.
01.40 "Большая игра". Детективный сериал.
03.00 "Последняя командировка. Памяти Виктора Ногина и Геннадия Куринного" (12+).
04.00 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Рәфис Хөснөтдинов (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина". "Һорнай" (6+)
15.00 "Тәүге ҡыңғырау". Мәктәп, уҡытыусылар тураһында йырҙар (6+)
